ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 октябрь (карасай)

2018

№42 (824)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был тәбиғәт мөғжизәһе...**

**туристарҙы ла ылыҡтырһын**




5

**Балаларыбыҙҙы...**

**үҙ рухыбыҙҙан мәхрүм итмәйек**



6

**Юлыҡтан - Юлыҡовтар**



7

**Моңло ла һуң башҡорт доғаһы!**



12-13

ТВ-программа 14

***Бер ярлы әҙәм үҙенең тормошона, Алланың уны Үҙенең изгелектәренән мәхрүм итеүенә зарлана икән. Быны ишетеп торған аҡыл эйәһе унан: "Әйт әле, һин үҙеңдең күреү һәләтеңдә йөҙ меңгә һатыр инеңме?" - тип һораған. "Юҡ, әлбиттә!" - тигән ярлы кеше. "Ә башҡа ағзаларыңды?" - тип ҡайтарып һораған ғалим. "Юҡ!" - тигән ярлы. "Ни өсөн һин хатта аҡсаға алыштырмаҫлыҡ байлығың була тороп, ярлымын, тип зарланаһың?" - тип, был әҙәмде аҡылға ултыртҡан аҡыл эйәһе..."***

МӨҺИМ ВАҠИҒА

## "МИНЕҢ КОМАНДАЛА БУЛЫУ ӨСӨН...

## халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе хәл итергә теләк кенә кәрәк"

**Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең Указы менән Радий Хәбировты Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тәғәйенләне.**

Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров менән таныштырып, "Радий Фәрит улы Башҡортостан халҡына яҡшы таныш сәйәсмән. Ул ошонда тыуып үҫкән, профессионал булараҡ танылған, республикалағы ижтимағи-сәйәси тормош үҙенсәлектәрен, милли характерҙы яҡшы аңлай, бөтә иҡтисади үҫеш өлкәләрен белә", тип билдәләне. Ысынында, вәкәләтле һәм республика кимәлендәге был тантанаға йыйылыусы Хөкүмәт ағзалары, Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, министрҙар, төрлө ойошма етәкселәре һәм йәмәғәтселек вәкилдәре Радий Хәбировты, уның биографияһын яҡшы белә булыр. Ул республиканың Ишембай районы Һайран ауылында тыуып үҫкән яҡташыбыҙ. Башҡорт дәүләт университетының юридик факультетын тамамлағандан һуң, 2003 йылға тиклем вузда эшләне. 2003 йылда Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институты директоры вазифаһынан Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде. 2008 йылда Мәскәүгә күсте, Рәсәй Федерацияһы Президентының Эске сәйәсәт идаралығы начальнигы урынбаҫары булып эшләне. 2017 йылдан Мәскәү өлкәһенең Красногорск башлығы вазифаһын башҡарҙы. Һәр хәлдә, республиканың киләсәктәге яңы етәксеһе тураһында һүҙ сыҡҡанда барыһының да тел осонда уның исеме булыуы бер кемгә лә сер түгел ине. Яҡташыбыҙ булғаны өсөн генә түгел, Рәсәй кимәлендә раҫланған заман етәксеһенә хас эшлеклелек сифаттары буйынса ла белде уны халыҡ.



**(Дауамы 3-сө биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Баланы нисә йәштән эшкә өйрәтергә?*

***Фәнүр БАЙЫШЕВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Һорауығыҙҙы ишеткәс тә әлеге бер билдәле кинәйә иҫкә төштө. Йәш әсә табипҡа: "Баланы нисә йәштән тәрбиәләй башларға була?" - тип һорау биргәс, "Ә балағыҙға нисә йәш һуң?" - тип ҡыҙыҡһына табип. "Туғыҙ ай". "Тимәк, һеҙ теүәл туғыҙ айға һуңлағанһығыҙ". Хеҙмәт тәрбиәһе менән дә шулай. Был, тимәк, иң тәүҙә ата-әсәнең үҙ-үҙенә ҡарата талапсанлығы, сәләмәт тормош рәүеше алып барыуы, эшһөйөүсәнлеге, һәр көн иртән физик күнекмәләргә ваҡыт бүлеүе, ваҡытында ашауы, ял итеүе һ.б. Был режимға күнеккән кеше ғаиләлә сабый донъяға килгәс тә шуны уҡ дауам итәсәк, тигән һүҙ. Ә бала ата-әсәнең һәр ҡылығын күреп үҫә, уны отоп ала, ҡабатлай. Әгәр атай кеше диванда телевизор ҡарап ятырға ярата икән, балаға тиҙҙән компик, айфон кәрәк буласаҡ, сөнки уға үҙ ғаиләһендә аралашыу, иғтибар етмәйәсәк. Минеңсә, эштән ҡайтҡас, балаң һәр саҡ янында булырға тейеш, ләкин мәжбүрләү юлы менән түгел, әлбиттә. Һинең менән уға ҡыҙыҡ булһын. Мин үҙем, мәсәлән, Ирек улымды гел үҙем менән йөрөтөргә тырыштым. Иң күңеллеһе - бергәләп баҡсаға барыу ине. Унда өй һала башлаған ғына саҡ. Был улыма хеҙмәт күнекмәһе һеңдереү өсөн бик тә ҡулай булды. Нисек итеп сүкеш, балта тоторға өйрәтеүҙән башлап, таҡта йышырға, тәҙрә-ишек уйырға, иҙән-түбә һалырға һәм башҡа төрлө төҙөлөш эштәренә өйрәнеү мәктәбе булды баҡса йорто улым өсөн. Шуға ла ул 15 йәшенән тип әйтерлек эшкә төштө лә уҡыуын киске мәктәптә дауам итте. Уны тамамлағас, һөнәрселек-техник училищеһына инеп, балта оҫтаһы-столярлыҡҡа уҡыны. Ә ғәмәлдә был һөнәрҙе бергәләп баҡса йорто төҙөгәндә үк энәһенән ебенә тиклем үҙләштергәйне инде. Бер ниндәй эштән дә ҡурҡып торманы, шул уҡ ваҡытта белемгә лә ынтылды. Армиянан ҡайтҡас, Мәскәү дәүләт университетын ҡыҙыл дипломға тамамлап, иҡтисадсы һөнәре алды. Әлеге ваҡытта эшҡыуарлыҡ менән әүҙем шөғөлләнә, Германияла йәшәй. Үҙенең улдары Азат менән Баянға ла тәүге хеҙмәт күнекмәләре бирә. 23 сутый ер участкаһында шулай уҡ ҙур йорт һалып инделәр.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ИҒТИБАР!*

**МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!**

**2019 йылдың тәүге ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 609 һум 96 тингә яҙылыу дауам итә.**

• Ошо көндәрҙә 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер **Мәүлит Ямалетдиновтың "Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**, **Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"**, **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**, **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**, **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан"**, **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ"**, **Зөлфиә Ханнанованың "Мин башҡорт тип таныштығыҙ"**, **Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр"**, **Миләүшә Ҡаһармановaның "Күңелем йылы теләй"**, **Азат Ярмуллиндың "У истоков Башкирской Республики"**, **"2019 йылға башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға эйә буласаҡ. **Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

✓ *Шуға ла йәштәрҙең ҡайһы берҙәре үҙләштергән һөнәре буйынса эшкә урынлаша алмай бер аҙ йөрөгәндән һуң, икенсе йүнәлештә эш башлай, хатта һатыусы, официант йәки репетитор булып эшләп йөрөгәндәре лә бихисап.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЙӘШТӘР ӨСӨН БОРСОЛАМ...

***Эльмира ХӘСӘНОВА, Өфө ҡалаһы Ф. Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Йәш быуындың киләсәге тураһында бик борсолам. Бөгөн күп йәштәр юғары уҡыу йортонда уҡып, ҡулына диплом алғандан һуң, артабан ҡайҙа эшкә барырға белмәй юғалып ҡала. Вакансия йәрминкәләре йыш уҙғарылып тора, ләкин хеҙмәт стажы йәки саҡ ҡына ла тәжрибәһе булмаған кешегә бер ойошма ла үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алып, эш тәҡдим итмәй. Шуға ла йәштәрҙең ҡайһы берҙәре үҙләштергән һөнәре буйынса эшкә урынлаша алмай бер аҙ йөрөгәндән һуң, икенсе йүнәлештә эш башлай, хатта һатыусы, официант йәки репетитор булып эшләп йөрөгәндәре лә бихисап. Күптәр бөтөнләй республиканан ситкә сығып китә. Бына шулай ҡулына диплом алған йәштәрҙе юғалтабыҙ.

Эйе, йәш кадрҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Әммә шул уҡ ваҡытта эш башларға әҙер йәштәргә юғары талаптар ҡуябыҙ. Был мәсьәләнең актуаллеген иҫкә алып, йәштәр үҙҙәре лә вузда уҡыған саҡта уҡ киләсәген хәстәрләп, һәр яҡлап талантын асырға ынтылһын ине, тим. Хәйер, йәш кеше үҙен киләсәк тормошҡа мәктәптә уҡыған саҡта уҡ әҙерләргә тейеш. Мин үҙемдең уҡыусыларыма был хаҡта әленән-әле һөйләйем, гимназияла ошо темаға төрлө осрашыуҙар ойоштораБыҙ.

Әйткәндәй, бөгөн студент саҡта уҡ йәмғиәткә үҙең тураһында белдерергә, һөнәри йәһәттән үҫешергә, тәжрибә тупларға мөмкинлектәр етерлек. Әүҙем йәштәр фән юҫығында ла, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашып, яратҡан шөғөлдәре буйынса уңыштарға өлгәшә ала. Бының өсөн төрлө мәғариф форумдары, мәҙәни саралар, ғилми конференциялар, йыйындар һәм башҡалар үткәрелеп тора. Аҡсалата ярҙам биргән проекттар ҙа бар, теләк һәм тырышлыҡ ҡына кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Баланы нисә йәштән эшкә өйрәтергә?

(Башы 1-се биттә).

***Әлфиә МИРҒӘЛИНА, тәрбиәсе, балалар психологы:*** Эш, хеҙмәт, бурыстар - өлкәндәр өсөн генә аңлайышлы төшөнсәләр булып тойолһа ла, балаларға уның туранан-тура ҡағылышы бар, сөнки тап бына улар баланың шәхес булараҡ үҫешендә төп әһәмиәткә эйә. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тигәндәй, кескәйҙәрҙең хеҙмәткә мөнәсәбәте, тәүге эш күнекмәләре ғаиләлә формалаша башлай һәм баланың артабанғы тормош юлы, хатта ки карьераһы тип әйтәйек, өй эштәренән башлана ла инде. Бәләкәстәрҙе нисә йәштән эшкә өйрәтә башларға кәрәк, тигән һорауға аныҡ ҡына яуап та юҡ ул. Был ата-әсәнең тәрбиә эшенә әҙерлегенә, өйҙәге мөхит торошона, ниһайәт, бәләкәстең үҫеш кимәленә бәйле, тик шуныһы бәхәсһеҙ: хеҙмәт тәрбиәһен мөмкин тиклем иртәрәк башлау хәйерле. Мәҫәлән, йәш ярымдан өс йәшкәсә кескәйҙәрҙә был осор өлкәндәргә оҡшарға тырышыу күҙәтелә, шуға ла шәхси өлгө менән тәрбиәләү алымдарын файҙаланыу отошло. Мәҫәлән, өй эштәре менән булғанда балаға сепрәк тоттороп, туҙан һөртөргә, аяҡ кейемдәрен теҙеп, рәтләп ултыртырға, уйынсыҡтарын йыйыштырырға ярҙамлашығыҙ. Эшен маҡтағыҙ, уның үҙен өйҙә кәрәкле кеше итеп тойоуына ярҙам итегеҙ. 3-5 йәштә инде һауыт-һабаны, йә булмаһа, ҡулъяулығын, ҡурсағы әйберҙәрен йыуыуын, сәскәләргә һыу ҡойоуын һорарға була. Был осорҙа әйберҙәрҙе йыйыштырыуға ҡарағанда, уларҙы гел тәртиптә тотоу яҡшыраҡ икәнен төшөндөрөргә тырышығыҙ. Киләсәктә был баланы йыйнаҡлыҡҡа өйрәтер. Ошондайыраҡ әҙерлектән һуң 6-8 йәшенә бала өй буйынса бына тигән ярҙамсығыҙға әүерелер. Уға хатта иҙән йыуыу, саң һурҙырғыс менән келәм һәм йомшаҡ мебелде таҙартыуҙы ышанып тапшырырға була, тик был осорҙа ни генә эшләһә лә уны битәрләмәгеҙ, тәнҡитләмәгеҙ, киреһенсә, маҡтап, дәртләндереп, рәхмәт әйтеп кенә тороғоҙ. Шул уҡ ваҡытта бөтөн эште лә яртылыҡта ташлап ҡалдырмайынса, аҙағына тиклем еткерелеүен күҙәтегеҙ. Бөтә был "йомшаҡ" һәм бәйләнсекһеҙ талаптар ахыр сиктә балаға таҙа, йыйнаҡ, тәртипле, эҙмә-эҙлекле, үҙаллы булырға ярҙам итер, көнкүрешендә кемдәндер бәйлелектән ҡотҡарыр, һәр эшкә маһирлығын арттырыр.

***Фәнүзә КИЛМӨХӘМӘТОВА, хеҙмәт ветераны:*** Үҙемдең бала саҡ иҫкә төштө. Беҙ, ауыл балалары, сәңгелдәктән төшкәндән эш менән үҫтек, тип әйтергә лә булалыр. Иркәләнеп, наҙланып, бөгөнгө балалар кеүек мультфильмдар ҡарап ултырманыҡ. Шуныһы яҡшы, тейем хәҙер, беҙҙең бала саҡҡа мультфильмдар ҙа, телевизор ҙа әләкмәне, шуға ҡарамаҫтан, хисһеҙ ҙә, ҡаты күңелле лә булып үҫмәнек, шөкөр. Уның ҡарауы, китап уҡыныҡ. Үҙебеҙҙән һуң тыуа килгән ҡусты-һеңелдәребеҙгә "ҡарауыл" булдыҡ. Бер ҡул менән сәңгелдәк тирбәтәм, икенсе ҡулымда китап булыр ине. Күрше ҡыҙҙар уйнай күҙҙе ҡыҙҙырып - бәпесте ташлап сығып булмай: әсәйҙең эше бөтмәй ҙә бөтмәй. Кис көтөү ҡайтҡас, мал ҡаршылау ҙа беҙҙең өҫтә. Айырыуса берәҙәк, ашамһаҡ һарыҡтарҙы эҙләп алып килеп, теүәлләп кәртәгә бикләп ҡуйғансы, ҡараңғы төшөп тә китә. Беҙ, ҡыҙҙар, күберәк әсәй янында булып, йорт эштәрен башҡарабыҙ: көйәнтәләп һыу ташыу, кер-иҙән йыуыу бер ни тормай. Артабан әсәйҙән әсетеп икмәк һалырға өйрәнәбеҙ. Әйткәндәй, ишле ғаиләгә әсәй көн дә икмәк әсетеп ҡуйыр ине. Малайҙар - атай ҡырында. Утын ярыу, мал һуғарыу, аҫтын таҙартыу һ.б. Үҫә килә, беҙгә йөкмәтелгән бурыс-йомоштар ҙа ҙурая барҙы. Күмәкләшеп бесән эшләйбеҙ. 13-14 йәштән салғы ла тота башланыҡ. Ҡустылар күбәләй, кәбән һала. Ситкә сығып китеп, эшләй башлағас та отпуск алған һайын мин әхирәттәрем һымаҡ, диңгеҙгә ял итергә түгел, ә бесәнгә ҡайтып төшә инем. Бына шулай үтте бала саҡ. Эш һәм хеҙмәт менән. Һис тә үкенмәйем, уның ҡарауы, тормошта аптырап, юғалып ҡалмаҫҡа, ныҡ булырға өйрәтә ул хеҙмәт, ә эшләмәгән бала былҡым була. Шуға ла баланы - бишектән, тигәндәре менән бик тә килешәм. Эш һөйгәндең хур булғанын күргән юҡ әле, шөкөр, ә бына иркәләнеп, ялҡауға һалышҡан балалар үҫкәс тә тере көйөк булып, ата-әсәһе елкәһендә ята. Бәләкәйҙән эшләтеп өйрәткән яҡшы, тик гел эш менән дә баланы бик баҫмай, маҙаһын ебәрмәй генә уйын, ял менән аралаштырып, ҡыҙыҡһыныу булдырылһа, шул дөрөҫөрәк булыр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИШАРА

# БЕҘҘЕ ХӘСТӘРЛӘРГӘ...
## ваҡыттары ҡалмай, күрәһең

**Мәктәптә башланғыс синыфта уҡығанда рус теле дәресендә "Мазай ҡарт һәм ҡуяндар" хикәйәһен һоҡланып тыңлағайным. Йылғаларҙа яҙын һыуҙар ташып ярҙарынан сыҡҡан саҡта ҡуяндарҙы ҡотҡарыусы Мазай ҡарттың изгелеге, ярҙамсыллығы һоҡландырҙы мине.**

Күптән түгел был хикәйә буйынса төшөрөлгән йәнһүрәт ҡараным. Мазай ҡарт кескәй утрауҙа һыу ҡамауында ҡалған ҡуяндарҙы һәм бүрәнәлә йөҙөп барған ҡуяндарҙы ла ҡотҡара ла, өйөнә ҡайтып, сәй ҡайнатам тип утын яра ғына башлаһа, "Ҡотҡарығыҙ!" тигән тауыш ишетеп, йәһәт кенә кәмәһенә ултырып, тауыш килгән яҡҡа йөҙә. Ул да булһа, Стенька Разиндың тулҡындарға ырғытҡан көнсығыш һылыуҡайы икән. Мазай ҡарт һылыуҡайҙы ҡотҡарып, тыуған иленә алып барып, ата-әсәһенә тапшыра ла, өйөнә ҡайтып, сәй ҡайнатам тип утын яра ғына башлаһа, "SOS" тауышын ишетеп ҡала. Бүрегенең бер ҡолаҡсынын күтәреп асып, тауышты бар иғтибар менән тыңлай ҙа, ашығып кәмәһенә ултырып, саҡырыу килгән яҡҡа йөҙөп барһа, "Титаник" карабының айсбергка табан йөҙөп китеп барыуын күреп ҡала. Шунан карапты әләктереп алып, һөйрәкләп, уның юлын икенсе йүнәлешкә үҙгәртеп ебәреп, ҡотҡарып ҡала...

Был Мазай ҡарттың мажараларын беҙҙең илебеҙгә оҡшаттым мин. Беҙҙең ил яугирҙары Ҡытайҙы Япон илбаҫарҙарынан азат итә. "Йәшел утрау" - Кубаны американдарҙан ҡотҡара, Афған һуғышында күпме ҡан ҡоя, ғүмерҙәр өҙөлә һ.б. Ҡотҡарабыҙ, ҡотҡарабыҙ, тик шағирыбыҙ Хисмәтулла Юлдашев яҙғандай:

*Ил көнө лә*
*Көнсығыштан,*
*Көнбайыштан ҡыҫылған.*
*Ҡайҙа элекке шаңдауҙар,*
*Ҡайҙа беҙгә дуҫ булған?"*

Мазай ҡарттың сәй эсергә лә ваҡыты ҡалмаған кеүек, ил етәкселәренең дә үҙ халҡын ҡайғыртырға ваҡыты ҡалмай, буғай...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров эш сәфәре менән "Башнефть" компанияһы предприятиеларында булды һәм "Новойл"да водород етештереү ҡулайламаһын, "Башнефть-Өфөнефтехим" нефть эшкәртеү заводында биологик таҙартыу ҡоролмаларын ҡараны, республиканың эре бизнесы менән конструктив мөнәсәбәттәр булдырыуын дауам итәсәге хаҡында һөйләне.

✓ Радий Хәбиров "Башнефть" предприятиеларына тәүге эш сәфәренән һуң "Роснефть" нефть компанияһының башҡарма директоры Игорь Сечин менән осрашты. Яҡтар компанияның төбәктәге производство эшмәкәрлеге менән бәйле байтаҡ һорауҙарҙы тикшерҙе, шулай уҡ Башҡортостан тауар етештереүселәренең хеҙмәттәр һәм тауарҙар һатып алыу буйынса "Роснефть" предприятиелары тендерҙарында ҡатнашыуы, "Башнефть" предприятиелары өсөн кадрҙар әҙерләү мәсьәләләре күтәрелде.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров халыҡ өсөн уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса кәңәшмә уҙғарҙы. Был мәсьәлә - иң мөһимдәренең береһе һәм уға "етди иғтибар бүлеү" күҙаллана, ҡала һәм район башлыҡтарының эшен халыҡҡа уңайлы шарттар булдырыу буйынса баһалайым, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров. Төбәк етәксеһе төҙөкләндереү һәм ремонттар бер урында ғына булырға тейеш түгел, балалар майҙансыҡтарында ла именлекте тәьмин итеү кәрәк, тип тә билдәләне.

✓ Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Указы менән Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһы һаулыҡ һаҡлау министрының беренсе урынбаҫары Рафаэль Яппаровҡа йөкмәтелде. Республика Башлығы вазифаһын башҡарыусының икенсе Указы менән Әнүәр Бакиров үҙ теләге буйынса Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһынан бушатылды.

✓ Башҡортостанда рәсми рәүештә Әсәйҙәр көнөн билдәләйҙәр. Башҡортостан Хөкүмәтенең тейешле бойороғо хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылып сыҡҡан. Әсәйҙәр көнөнә арналған республика байрам сараһы 2018 йылдың 16 ноябрендә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтә. Әсәйҙәр көнөнә арналған сара республиканың бөтә ҡалаларында һәм райондарында уҙа.

*✓ Эшебеҙҙе дүрт миллионлы республика халҡы мәнфәғәтенән, һәр граждан мәнфәғәтенән сығып, асыҡлыҡ, законлылыҡ, эш урынындағы һөҙөмтәлелек нигеҙендә төҙөргә тәҡдим итәм...*



*МӨҺИМ ВАҠИҒА*

# "МИНЕҢ КОМАНДАЛА БУЛЫУ ӨСӨН...

## халыҡты борсоған мәсьәләләрҙе хәл итергә теләк кенә кәрәк"





**(Башы 1-се биттә).**

Йыйылыусылар, әлбиттә, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп таныштырыу тантанаһында Радий Хәбировтан уның был вазифалағы эш йүнәлештәре, төп бурыстар тураһында ишетергә теләне. Ҡыҫҡаса ғына шулай билдәләнде был бурыстар:

- Мин республика халҡы алдындағы яуаплылыҡты бик яҡшы аңлайым. Бөтә көсөмдө Башҡортостан Республикаһының артабанғы үҫешенә һәм уның халҡының тормошон яҡшыртыуға йүнәлтәсәкмен. Нәҡ ошо бурыстарҙы үтәүҙе һәр ҡайһығыҙҙан һорай һәм талап итәсәкмен, - тине Радий Фәрит улы. - Бөтә тырышлығыбыҙҙы туплағанда, закондар сығарыу, башҡарма, хоҡуҡ һаҡлау власть тармаҡтары көсөн, муниципалитеттар башлыҡтары эшмәкәрлеген берләштергәндә генә республиканы артабан да үҫтереү бурысын атҡарып буласаҡ. Эшебеҙҙе дүрт миллионлы республика халҡы мәнфәғәтенән, һәр граждан мәнфәғәтенән сығып, асыҡлыҡ, законлылыҡ, эш урынындағы һөҙөмтәлелек нигеҙендә төҙөргә тәҡдим итәм...

Бөгөн һәр кемдең мейеһен быраулаусы "Тик бына был бурыстарҙы ул кемдәр менән атҡарыр?" тигән һорауға ла ишаралап ҡуйҙы Радий Фәрит улы: "Минең командала булыу бик ябай. Ни бары кешеләрҙең ҡайғыһын уртаҡлашырға, уларҙы борсоған мәсьәләләрҙе белергә һәм шуларҙы хәл итергә теләк кенә кәрәк. Үҙеңдән яуаплылыҡты алып ташларға ярамай. Мәҫәлән, торлаҡ төҙөгәндә уның эргәһендә бер юлы социаль объекттар ҙа һалырға кәрәклеген "белмәгән" чиновниктар миңә кәрәкмәй..." Әлбиттә, яңы етәксе бер үк ваҡытта ғәмәлдәге команда менән эшләргә ниәтләнеүен дә инҡар итмәне һәм урындағы кадрҙар потенциалын "юғары" тип баһаланы. Тимәк, етәксе урындарҙа эшләүселәргә яңы талаптарға яуап бирерҙәй көсөн, һәләтен самалап, баһалап, республика мәнфәғәте өсөн эшләргә әҙер булыу ихтыярын уятып, ихласлапең һыҙғанырға ғына ҡала. Бер үк ваҡытта шуны ла иҫтән сығармау мөһим. Кемдер берәү әйтмешләй, көтөү кирегә боролған мәлдә "артта һөйрәлеүсе әтрәгәләмдәр" алға сығыусан. Бына шундай артта һөйрәлгән һәм донъяны артҡа һөйрәгән, әммә ялағайлығы, әрһеҙлеге арҡаһында ваҡиғалар башында булырға һәләтлеләрҙән Хоҙай һаҡлаһын. Беҙ был тарихты баштан кисерҙек инде...

Хәйер, Радий Фәрит улын республикалағы хәлдәрҙе һәм кемдең кем икәнен белмәгән кеше тип ҡабул итмәйек. Башҡортостанда тыуып үҫеп тә, ситкә сығып киткәс, республика мәнфәғәтенә, халҡына хеҙмәт итеүҙе онотҡан кешеләр рәтенән түгел ул. Радий Фәрит улы бер ваҡытта ла тыуған ватанын онотманы. Беҙ уның илдең баш ҡалаһындағы эшмәкәрлеге тураһында башлыса Мәскәүҙә уҡыған Башҡортостан йәштәренән ишетеп торҙоҡ. Ул йыш ҡына йәштәребеҙ үткәргән мәҙәни һәм спорт сараларында ҡатнашты, атайҙарса ҡурсалаған кәңәштәрен еткерҙе. Йәштәр бөгөн социаль селтәрҙәрҙә Радий Фәрит улының сығыштарын иҫкә төшөрә: "Һеҙ Мәскәүҙе яулау өсөн конкурентлы көрәшкә аяҡ баҫтығыҙ, - тип сығыш яһаны Радий Фәрит улы беҙҙең бер кисәлә, тип яҙа бер студент. - Ләкин "Ҡайҙа тыуһаң, шунда кәрәк бул!" тигән мәҡәл бар. Һеҙҙе Башҡортостанда бик көтәләр. Мин һеҙҙең республиканы алға, сәскә атыуға алып барыусы локомотив булырығыҙға ышанам. Был һеҙҙең ҡулдан киләсәк. Ләкин мин үҙемде лә һеҙҙән айырып ҡарамайым - беҙҙең ҡулдан киләсәк!"

Йәштәр алдында һөйләгән тағы бер сығышынан өҙөк: "Бер саҡ оператив кәңәшмә ваҡытында мине яҡшы белгән етәкселәремдең береһе минең бик тә онотолоп китеп, хыялланыусан йөҙ менән ултырғанымды шәйләп ҡалған да: "Радий, Башҡортостан тураһында төш күреүеңде туҡтат инде", - тип өндәште. Мин уға шулай тип яуапланым: "Беләһегеҙме, был мин үтәй алмаған берҙәнбер задание. Сөнки ул минең ватаным һәм мин һәр ваҡыт үҙемдең республикам тураһында төштәр күрәсәкмен һәм уйлаясаҡмын", тинем..."

Һәм бына Радий Фәрит улының республикаға ҡайтҡас, "Рәсәй 1" телеканалына биргән интервьюһынан өҙөк: "Мин урта йәштәрҙә Мәскәүгә сығып киттем, унда 10 йыл эшләнем һәм, әлбиттә, һағына инем. Маҡсатым - минән алда эшләгән кешеләрҙең һәйбәт эш һөҙөмтәләрен һаҡлау һәм республикалағы тормошто тағы ла яҡшыраҡ итеү". Ошо урында "...минән алдағы кешеләрҙең һәйбәт эш һөҙөмтәләрен һаҡлау", тигән фекерен күтәрмәләп китәйек. Бындай фекер етәксе кешенең тәрбиәлелек, эске мәҙәнилек кимәлен иҫбатлай икәнен кем белмәй! Беҙ, ишембайҙар, Радий Фәрит улын иң тәүҙә матур ғаиләлә үҫкән, матур тәрбиә алған, атай-әсәйенең изгелекле, тәрбиәле балаһы итеп беләбеҙ ҙә инде. Ә тәрбиәлелек - иң тәүҙә өлкән быуынға хөрмәт, тигән һүҙ. Бына әле барыһы ла Радий Фәрит улының тәүге эш көнөндә үк республиканың беренсе президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов менән осрашыуына, уға оло хөрмәт күрһәтеүенә һоҡлана һәм ҡыуана. Әйткәндәй, Мортаза Ғөбәйҙулла улын "онотоп" торған йылдар, моғайын, республика йылъяҙмаһында иң хурлыҡлы ваҡиға булып яҙылыр...

Нисек кенә булмаһын, ошо көндәрҙә бер яҙыусы әйткәнсә, Радий Фәрит улы республика кешеләрен рәхимовтыҡыларға, хәмитовтыҡыларға бүлеп ҡарамаҫ, тигән ышаныс бар. Бер йәмғиәттә йәшәгән кешеләрҙе бүлеп ҡарарға ярамай һуң! Етәкселәрҙең, сәйәсмәндәрҙең тап бына ошондай ҡылығы донъяны артҡа һөйрәйҙер ҙә инде ул...

**Шулай итеп, бар республика халҡы, шулай уҡ ситтә йәшәгән яҡташтар, милләттәштәр ҙә, Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың аҙна эсендә башҡарырға өлгөргән эштәрен күҙәтеп бара, баһалай, тағы ла баһалыраҡ эштәр көтә, тик яҡшыға өмөт итә. Өмөт итәйек. Ләкин беҙ, хөрмәтле милләттәштәр, Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ алдындағы үҙебеҙҙең бурыстарҙы ла онотмайыҡ. Ошондай гүзәл ил-йортобоҙ, үҙаллы ватаныбыҙ булғанға шөкөр итеп, һәр кемебеҙ үҙ урынында уны сәскә аттырыуға өлөш индерәйек. Ғаиләләребеҙҙе үҙаллы бер дәүләт итеп ҡороп, ундағы көнитмешебеҙҙе, эш-шөғөлөбөҙҙө үҙебеҙсә ойоштороп, рухлы, телле, мәҙәниәтле балалар үҫтерәйек. Бына был - иң мөһиме.**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың Ейәнсура районында яңы хакимиәт башлығы. Ул - 32 йәшлек Дамин Юланов. Уны тәғәйенләү тураһында ҡарар муниципаль район Советы ултырышында ҡабул ителде. Дамин Юланов 1986 йылда тыуған, 2009 йылда Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған. Ошо көнгә тиклем районның ҙур ауыл хужалығы предприятиеһы - "Маяҡ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте менән етәкселек итте.

✓ "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһе эшенең йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы предприятиелары тармаҡ конкурстарының 166 миҙалы менән билдәләнде, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығында. Уларҙың 94-е - алтын, 44-е - көмөш һәм 28-е - бронза. Башҡортостан Хөкүмәте "Күргәҙмә үҫешенә өлөш индергәне өсөн" Гран-приға лайыҡ булды.

✓ Башҡортостан Республикаһынан ике баҫма "Рәсәйҙең иң яҡшы биш этник баҫмаһы" конкурсында иң яҡшылары тип танылды. Ул - "Иң яҡшы район (муниципаль) гәзите" номинацияһында "Туймазы хәбәрҙәре" ижтимағи-сәйәси гәзите һәм "Иң яҡшы балалар баҫмаһы" номинацияһында мәктәпкәсә һәм башланғыс мәктәп йәшендәге балалар өсөн ай һайын сыҡҡан "Аҡбуҙат" әҙәби-нәфис журналы.

✓ "Йатаған Мөслим" башҡорт этнотөркөмөн XIX Халыҡ-ара Ҡөрьән уҡыусылар конкурсына саҡырҙылар. Сара 21 октябрҙә Мәскәүҙә, Рәсәйҙең ҙур залдарының береһендә - Крокус Сити Холда уҙа. Конкурсҡа 30-ҙан ашыу илдән көслө хафиздар килә. "Йатаған Мөслим" аутентик милли уйын ҡоралдарында дини көйҙәр уйнай. Ҡөрьән уҡыусылар конкурсын ойоштороусылар - Рәсәйҙең Мөфтөйҙәр советы, Рәсәй мосолмандарының Диниә назараты. Сара йыл һайын уҙғарыла һәм ете меңлек зал йыя.

✓ "Яндекс" аналитиктары Мәскәүҙән һәм Санкт-Петербургтан ситтәге иң яҡшы театрҙар рейтингын төҙөгән. Тәүге етәүгә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия театры ла ингән. "Рәсәйҙең иң мөһим милли театрҙарының береһенең спектаклдәре башҡорт телендә бара; рус телле тамашасылар өсөн синхрон тәржемә ҡаралған. Сәхнәлә - көслө метафорик театр, мәңгелек темалар һәм һирәк осраған профессиональ труппа", - тип әйтелгән тасуирламала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# НӘШРИӘТ ЯБЫЛЫРМЫ?

**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Башҡортостан" нәшриәтен бөлгөнлөккә төшөрөүгә юл ҡуйған чиновниктарҙы тәнҡитләне һәм төбәктәге берҙән-бер дәүләт нәшриәте һаҡланып ҡалырға тейешлеге белдереп, 15 ноябргә ҡәҙәр уны ҡотҡарыу вариаттарын әҙерләргә күрһәтмә бирҙе.**

Алдан хәбәр ителгәнсә, "Башҡортостан" нәшриәт йортонон хужалыҡ эшмәкәрлеген туҡтатыу тураһында ҡарар ҡабул ителергә тейешле йыйылыш 23 октябргә билдәләнгәйне. Предприятиела 100-ҙән ашыу кеше эшләй, улар июлдә үк ҡыҫҡартылыу тураһында белдереү ҡағыҙҙары алды. Сентябрь башында "Башҡортостан" нәшриәтендә ҙур тираж менән баҫылған гәзиттәрҙең редакцияларына тиҙҙән унын эше туктатылыуы тураһында хәбәр иткәйнеләр. Башҡортостан Республикаһының Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы башлығы аңлатыуынса, октябрь башына әлеге предприятиеның 49,8 миллион һум дебиторлыҡ бурысы һәм 385,5 миллион һумлыҡ кредит бурысы булған. Шуға ла ведомство предприятиены банкротка әйләндереү башланғысы менән сыҡҡан.

- Нәшриәттең бинаһы үҙәктә урынлашҡан, күпмелер ваҡыттан һуң унда ниндәйҙер күңел асыу йәки сауҙа үҙәге төҙөүҙәре мөмкин. Ә баҫыу станоктарын металл һыныҡтары итеп тапшырырбыҙмы? Быға нисек юл ҡуйҙығыҙ? - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Евгений Гурьевҡа һәм Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедовҡа, һәм әгәр нәшриәтте юғалтҡан осраҡта уларға ҡарата саралар күрелер тип вәғәҙәләне.

# ҮҘГӘРЕРГӘ!

**Башҡортостан Хөкүмәте үҙенең оператив кәңәшмәләрен хәҙер шәмбе һайын көндөҙгө сәғәт 1-ҙә уҙғара башлай. Уларҙа видеоконференция режимында республиканың ҡалалар һәм районлар хакимиәттәре башлыҡтары ҡатнаша ала. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Хөкүмәт Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәновҡа ошондай йөкләмә бирҙе.**

Радий Хәбиров, дәүләт хеҙмәтендә нормаға һалынған эш көнө булмай, шуның өсөн чиновниктарҙың эшкә ҡарата мөнәсәбәттәрен үҙгәртергә кәрәк, тип билдәләнә. Уның әйтеүенсә, ул чиновниктарҙың, хөкүмәт ағзаларының һәр ҡайһыһында билдәле бер тормош һәм һөнәри тәжрибәһе барлығын яҡшы белә, ләкин кемдәренеңдер эшкә һәм халыҡҡа ҡарата миһырбанһыҙ мөнәсәбәте менән килешмәйәсәк.

- Мин - романтик та, теоретик та түгел, мин - айыҡ аҡыллы сәйәсмән. Һеҙҙең менән дөйөм эш буйынса партнерҙарса һөйләшәм. Хөкүмәт ағзалары һәм муниципалитеттар башлыҡтары, тағы бер төркөм етәкселәр, бөтәһе бергә 200 кеше, кешеләр үлмәһен, балалар мәктәпкә балта тотоп йөрөмәһен өсөн яуаплы. Әгәр тейешенсә эшләргә әҙер булмаһағыҙ, башҡа нәмә менән шөғөлләнә алаһығыҙ, - тине Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Урындағы инициативаларға ярҙам итеү программалары үҙенең файҙалы ысул икәнлеген һәм социаль әһәмиәтен күптән раҫланы инде. Халыҡтың үҙе йәшәгән ҡалаһын, ауылын төҙөкләндереүҙә, йәмәғәт тормошон ойоштороу буйынса аныҡ эштәрҙә ҡатнашыуы матур бер йолаға әүерелде. Был аҙнала Өфө ҡала округы хакимиәтендәге оперативкала ошо хаҡта ла һүҙ барҙы.**

# ХАЛЫҠ ҮҘЕ ҠАТНАША

Ҡаланың Киров районында "Өфө ихаталары" һәм "Кала мөхитен формалаштырыу" проекттарына ярашлы ихаталарҙы ремонтлау буйынса ҙур эштәр ошо көндәрҙә тамамланды. Киров районы хакимиәте башлығы Динар Хәлилов йорт ихаталарын төҙөкләндереү, законһыҙ ҡуйылған гараждарҙы алыуға бағышланған докладында билдәләүенсә, районда йорт ихаталарында асфальт ҡатламы яңыртылған, яңы бордюрҙар ҡуйылған, урамды яҡтыртыусы бағаналар күсерелгән йәки яңыртылған, өстәмә парковка урындары булдырылған. Һәм был капиталь ремонт проекттарының барыһы ла ошо йорттарҙа йәшәүселәрҙең дөйөм йыйылыштарында раҫланған, сөнки был эштәрҙе башҡарыуға күп ҡатлы йорттарҙың фатир хужалары ла үҙ өлөшөн индергән. Улай ғына түгел, улар һәр эштең сифатын тикшереп, уларҙы ҡабул итеүҙә лә әүҙемдәр. Динар Ғәли улы әйтеүенсә, бындай проекттар халыҡта үҙ йортона, ихатаһына хужаларса ҡараш, таҙалыҡ, төҙөклөк өсөн яуаплылыҡ тойғолары уята. Был күркәм өлгөгә күрше йорттарҙа йәшәүселәр ҙә эйәрергә теләк белдерә, мәҫәлән, әлеге мәлдә 2019 йылға ғаризалар ҡарала. Дөйөм алғанда, 2017-2018 йылдарҙа "Кала мөхите" һәм "Өфө ихаталары" программаларын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Киров районында ғына 36 ихата төҙөкләндерелгән, 11 - балалар, 3 - спорт майҙансығы, 1320 парковка урыны барлыҡҡа килгән. Был эштәр менән бер рәттән ихаталарҙы законһыҙ ҡуйылған металл гараждарҙан таҙартыу ҙа әүҙем бара. 4 йыл эсендә районда 2 мең гараж алып ташланған, уларҙың 800-ө мәғариф учреждениелары эргәһендә урынлашҡан булған. Ҡала хакимиәте вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Салауат Хөсәйенов әлегә был капиталь ремонт программаларына әлегә алмаған ихаталарҙа барлыҡҡа килгән юл соҡорҙарын ремонтлау эшен дә ҡуҙ уңынан сығармаҫҡа өндәне. Бындай участкаларҙа килеп тыуған проблемалар үҙ ваҡытында хәл ителергә тейеш, тип билдәләне Салауат Сәхи улы, сөнки халыҡ ремонт көтөп ултыра алмай, улар бөгөн ошо юлдарҙан йөрөргә мәжбүр.

Өфө ошо көндәрҙә "Мегаполис. Бала саҡ территорияһы" халыҡ-ара форумын ҡабул итте. Ул бала хоҡуҡтары һәм ҡыҙыҡһыныуҙарын яҡлау буйынса белгестәр өсөн үткәрелде. Уның һөҙөмтәләре тураһында хакимиәттең Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы етәксеһе Татьяна Квасникова һөйләне. Өфөнөң визит карточкаһына әүерелгән был форум быйыл дүртенсе тапҡыр, ә икенсе тапҡыр халыҡ-ара статусында үтте. Быйыл ул ҡатнашыусылар һәм эксперттарының күп булыуы менән айырылып торҙо. Форум эшендә Рәсәйҙең 39 төбәгенән 400 белгес ҡатнашҡан. Өфө ҡалаһында социаль етемлекте профилактикалау, шулай уҡ балалыҡты яҡлауҙың халыҡ-ара һәм төбәк тәжрибәһе күрһәтелгән.

Салауат Сәхи улы шулай уҡ 2019 йылда тапшырыласаҡ 1300 урынлыҡ 44-се мәктәптәге ремонт эштәрен, "Сағыу" микрорайонындағы 1000 урынлыҡ мәктәп, Максимовка ауылындағы 195 урынлыҡ һәм Инорстағы 340 урынлыҡ балалар баҡсалары төҙөлөшөн һәм башҡа социаль объекттарҙы ныҡлы контролгә алырға ҡушты. Яҡын киләсәктә төҙөләсәк йәки ремонт талап иткән тағы ла 63 объект буйынса ла яуаплы кешеләрҙән эшлекле тәҡдимдәр көтөүен белдерҙе.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТАУЫШ БИРӘЙЕК!




**Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы "Өфө" халыҡ-ара аэропортына Башҡортостандың бөйөк ватандашының исемен биреү буйынса федераль проектҡа ҙур тыңлауҙар уҙғарҙы. Сарала белгестәр, баш ҡаланың әүҙем халҡы һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре ҡатнашты.**

Республикала йәшәүселәрҙән Башҡортостан Йәмәғәт палатаһына бөтә мөмкин булған ысулдар - телефон, электрон почта аша, һораулама барышында - 40 кандидатура буйынса 1,5 мендән ашыу фекер килде. "Кешеләр республиканың төрлө мөйөшөнән шылтыратты. Быға тиклем бер проектка ла ошондай ҙур ҡыҙыҡһыныу булманы", - тип билдәләне Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы рәйесе Ольга Панчихина һәм тәүге 10 исемде атаны: Мостай Кәрим, халыҡ шағиры, яҙыусы; Муса Гәрәев, хәрби летчик, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы; Салауат Юлаев, милли герой; Сергей Аксаков, яҙыусы; Рудольф Нуриев, балет артисы; Минлегәли Шайморатов, генерал-майор; Федор Шаляпин, опера йырсыһы; Александр Матросов, Советтар Союзы Геройы; Михаил Нестеров, рәссам; Сергей Довлатов, яҙыусы, журналист. Башҡортостан Йәмәғәт палатаһы рәйесе һүҙҙәренсә, тәҡдим ителгән һәр кандидатураның исеме Өфө аэропортына биреүгә лайыҡ. Конкурс 5 декабрҙә тамамлана - Рәсәй халҡы аэропорттарға биргән исемдәр билдәле була.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Цюрупа урамындағы Маяковский скверы эргәһендә яңы йорттарҙы һыу менән тәьмин итеү селтәренә тоташтырыу эштәре бара. Шуға бәйле был участкала транспорт хәрәкәте сикләнгән. Мәрияла хәбәр итеүҙәренсә, эштәрҙе тамамлау ваҡыты 21 октябрь, йәкшәмбегә билдәләнгән. Әлегә водителдәргә башҡа урамдарҙан йөрөргә кәңәш итәләр.

✓15 октябрҙә комиссия Өфө мәры вазифаһын биләү өсөн конкурсҡа документтар ҡабул итеүҙе тамамланы. 29 кеше ғариза бирҙе. Өфө хакимиәте башлығы урынын алырға теләүселәр исемлегендә төрлө компанияларҙың генераль директорҙары, эшҡыуарҙар, чиновниктар, журналистар һәм эшһеҙҙәр бар. 22 октябргә тиклем комиссия барлыҡ документтарҙы тикшерә һәм конкурсанттарҙың исемдәрен рәсми рәүештә иғлан итә. Яңы мэрҙың исеме 29 октябрҙә билдәле була.

✓Өфөлә һауа температураһының түбәнәйеүе менән бәйле фонтандарҙың эш миҙгеле тамамланды. Ҡала биләмәһендәге бөтә 19 ҡоролма ҡышҡа ябыла, тип хәбәр иттеләр "Горзеленхоз" муниципаль унитар предприятиеһында. Йәнә уларҙы яҙы йылдан, апрель аҙағында - май башында яңынан асасаҡтар.

✓Мәскәүҙән Башҡортостандың баш ҡалаһына автобус рейсына билеттар һатыла башланы. "Новогиреево" автостанцияһынан Өфөгә тиклем маршрут автобустары көн һайын (Перовская урамы, 70-се йорт) киске сәғәт 6-ла юлға сыға. Юл хаҡы өлкәндәргә - 1 800 һум, айырым урын биләгән 12 йәшкәсә балаларға (тыуыу тураһында таныҡлыҡты күрһәтергә кәрәк) 900 һум тәшкил итә. Багаж - 200 һум", - тип хәбәр иттеләр "Мосгортранс"тың матбуғат хеҙмәтендә.

✓Һорау алынған рәсәйҙәрҙең фекере (SuperJob мәғлүмәттәренә ярашлы) буйынса, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм Төмәндә уңышлы карьера төҙөп була. Баш ҡаланы респонденттарҙың - 74 проценты, төньяҡ баш ҡаланы 72 процент, ә өсөнсө ҡаланы 66 процент билдәләгән. Өфөлә йәшәүселәрҙең яртыһы тиерлек (49 процент) Башҡортостандың баш ҡалаһы мөмкинлектәрен карьера төҙөү өсөн уңышлы ҡала булараҡ баһалаған.

ҺӨЙӨНСӨ!




**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғо менән 2017 йылда булдырылған "Янғантау" геопаркы бөгөн ЮНЕСКО эгидаһы аҫтында 2002 йылдан бирле эшләүсе бөтә донъя милли геопарктар селтәренә ингән геопарк статусын Рәсәйҙә беренсе булып алыуға дәғүә итә.**

# БЫЛ ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ...

## туристарҙы ла ылыҡтырһын

2018 йылдың 15 сентябрендә ЮНЕСКО геопарктарының Италиялағы Адамелло-Брента ҡалаһында (унда Милли парк урынлашҡан) үткән 8-се Халыҡ-ара конференцияһында "Янғантау" геопаркының бөтә донъя милли геопарктар селтәренә инеүгә дәғүә иткән ғаризаһы хупланды. 2019 йылда "Янғантау" геопаркы барлыҡҡа килеүе тураһында рәсми белдереү яһалырына ышаныс бар. Мәсьәлә ыңғай хәл ителгәндә, ул донъяның 38 илендә булған 140 геопарк исемлегенә һәм Рәсәй Федерацияһының тәүге геопаркы булып тарихҡа инәсәк.

Геопарк майҙаны 1700 км² тәшкил итә. Үҙенсәлекле геологик объекттарға Мәсетле киҫелеше, Янғантау тауы, Оло Лука киҫелеше, Лаҡлы уйымы, Күҫәләр көкөрт сығанағы, Ҡорғаҙаҡ сығанағы, Ҡаратау һырттары инә. Геопарктың тәбиғәт үҙенсәлеге Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһының Ҡыҙыл китаптарына ингән үсемлек һәм хайуан төрҙәренең күп төрлөлөгө менән бәйле. Шулай уҡ территорияла Рәсәйҙең милли һәм халыҡ-ара әһәмиәткә эйә "Өфө яйлаһы" төп орнитология биләмәһе лә урынлашҡан. Геопарктың туғыҙ тәбиғи һәм геологик объекты айырыуса һаҡланған территориялары төбәк селтәренә инә. Әй һәм Йүрүҙән йылғалары буйынса ҡом һайыҫҡаны һәм сапсандарҙың тығыҙ популяциялары билдәләнгән. Геопаркта селәндәрҙең Башҡортостан Республикаһындағы ике эре колонияһы бар. Бындай үҙенсәлек территорияла бердвотчинг (watching bird) - экотуризмдың иң популяр булған йүнәлештәренең береһен үҫтереү мөмкинлектәрен бирә.

Территория матди булмаған мәҙәни мираҫтың юғары үҫеш кимәле менән айырыла. Йыл һайын районда башҡорт халҡының мәҙәни традицияларын һаҡлауға йүнәлтелгән "Салауат йыйыны" халыҡ-ара фестивале үткәрелә. Күп һанлы кәсепселек һәм һөнәрселек: солоҡсолоҡ, йылҡысылыҡ, ҡымыҙсылыҡ, халыҡ кейемдәре менән музыка ҡоралдары әҙерләү, көршәкселек һәм дағалау эше, бағымсылыҡ үҫешкән. Матди-мәҙәни мираҫ 32 археология ҡомартҡыһында (ҡурғандар, ҡаласыҡтар, ултыраҡтар, мәмерйә тораҡтары) сағылған, шуларҙың 9-ы федераль әһәмиәттә, мәҫәлән, Иҙрис мәмерйә торағы һәм Иҙрис яҙмаһы, Лаҡлы, Иҙрис һәм Урмантау мәмерйәләре, Ҡорғаҙаҡ сығанағы, Күҫәләр көкөрт сығанағы, Лаҡлы ауылы янындағы Ҡапҡаташ, Яхъя киҫелеше, Лимоновский һырты һ.б. Был геообъекттарҙы барып күреү маҡсатында ойошторолған экскурсия-турист маршруттары эшләй. Геопарк территорияһында ошо ерҙең геологик, тәбиғи тарихы буйынса белем бирерлек, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының мәҙәниәтенә һөйөү уятырлыҡ 24 музей эшләй. Геопарк территорияһында шулай уҡ 20 туристик маршруттан торған селтәр булдырылған. Быйылдан башлап геопарк "Йәш геолог" республика ялан профиль лагеры сиктәрендә гидрометрия, радиометрия, минералогия һәм петрография, палеонтология буйынса уҡыуҙарҙың даими майҙансығына әйләнде. Территорияла Башҡорт дәүләт университетының география факультеты студенттары ялан тәжрибәләре уҙғара.

Ҡыҫҡаһы, геологик парктар булдырыу иҡтисади үҫешкә, социаль инфраструктураны яҡшыртырға, туристар ағымын арттырырға, киң аудитория өсөн ҡыҙыҡлы мәғариф проекттарын ғәмәлгә ашырырға булышлыҡ итергә тейеш. Туризм йыш ҡына биләмәләрҙе үҫтереүҙең төп факторҙарының береһенә әүерелә. Күп кенә дәүләттәрҙә хеҙмәттәр экспортының өстөн бер өлөшө һәм хатта күберәге туризм, рекреация өлөшөнә тура килә. Был йәһәттән беҙҙә, әлбиттә, резервтар ҙур.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА әҙерләне.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺАҠСЫЛ ФАЙҘАЛАН!

**Үҙәк матбуғат сараларында хәбәр ителеүенсә, Рәсәй хөкүмәте халыҡ өсөн электр энергияһы ҡулланыуҙа социаль норма билдәләүҙе ҡабаттан ҡарарға йыйына.**

Уның буйынса, лимит артып киткән хәлдә тарифтар ҙа киҫкен күтәреләсәк. РФ Энергетика һәм Иҡтисад министрлыҡтарының был тәҡдимен вице-премьер Д. Козак хуплап сыҡты. Социаль норманың был варианты 2013-2014 йылдарҙа индерелгән схемаға ҡарағанда "йомшағыраҡ" булһа ла, хөкүмәт электр энергияһын халыҡ категорияһында ҡулланыусы ҡайһы бер ведомстволар (баҡсасылыҡ, йәшелсәселек ширҡәттәре, гараж кооперативтары, кешеләрҙең һарай, мөгәрәп кеүек ярҙамсы хужалыҡ объекттары һ.б.) исемлегенең ҡыҫҡартылыуы һәм электр плитәле ауыл йорттарында ташлама менән файҙаланыуҙың юҡҡа сығарылыуы ихтимал. Социаль норма айына 300 кВт/сәғ. тәшкил итә һәм нигеҙ тариф буйынса, шунан да артығырағы - юғары, ә инде 500 кВт/сәғәттән артығы "иҡтисади нигеҙләнеш" тарифы буйынса түләтеләсәк, тип күҙаллана. Социаль ярҙамға мохтажлығы булған граждандар субсидияға иҫәп тота ала, тигән хәбәр ҙә бар.

Әйткәндәй, сентябрь аҙағында шулай уҡ Рәсәй хөкүмәте 2019 йылға торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙы этаплап индексациялауҙы раҫланы. Ғинуарҙан ул - 1,7 һәм 1 июлдән 2,4 процентҡа артасаҡ. Был хаҡта иҡтисади үҫеш министры Максим Орешкин хәбәр итте. Коммуналь хеҙмәттәргә хаҡ күтәрелеү 1 ғинуарҙан өҫтәмә хаҡҡа һалым (НДС) күләменең 18-ҙән 20 процентҡаса арттырылыуы менән аңлатыла. 2019 йылға тарифтарҙы индексациялауҙың дөйөм кимәле 4 проценттан артмаясаҡ.

# ИМТИХАНДАР ҠӘТҒИЛӘШӘМЕ?

**Рәсәйҙә "майҙансыҡ" һәм "ҡала" нормативтарын бер практик өлөшкә берләштереп, водитель таныҡлығын алыуға имтихандар тапшырыу ҡағиҙәләрен үҙгәртеүҙәре ихтимал.** Шулай уҡ автомагистралдәрҙә йөрөтөргә өйрәнеүҙе тыйыуҙы бөтөрөргә тәҡдим ителә. Тейешле проекты Эске эштәр министрлығы әҙерләгән, тип хәбәр итә "Известия". Әгәр үҙгәрештәрҙе хуплаһалар, "теория"нан һуң шунда уҡ кеше артабан һынауҙар үтеү өсөн урамдарға сыға. Практик йөрөтөүгә күберәк иғтибар бүлергә ниәтләйҙәр. Был водителдәр әҙерләүҙе яҡшыртырға һәм юлдарҙа авариялар һанын кәметергә тейеш. Эске эштәр министрлығы шулай уҡ һынауҙарҙың теоретик өлөшө ваҡытында мотлаҡ аудио- һәм видеотеркәү индерергә тәҡдим итә, уны беренсе имтиханды тапшыра алмағандан һуң 7-30 көн эсендә ҡабаттан бирергә мөмкин. "Практика"ны яңынан тапшырыу өсөн ике ай ваҡыт бүлеү ҡаралған. Ләкин буласаҡ водитель тамамлаған автомәктәптең тейешле лицензияһы булмауы асыҡланһа, уға һынауҙы ҡабаттан биреүҙе кире ҡағыуҙары мөмкин.

Әйткәндәй, Рәсәйҙәргә водитель таныҡлығынан башҡа машина йөрөтөргә рөхсәт итеүҙәре ихтимал. Дөрөҫөн әйткәндә, уның төп нөхсәһенән тыш. Бының өсөн ЮХХДИ-ла мобиль ҡушымта уйлап сығарырға тәҡдим итәләр. "Башланғысты ғәмәлгә ашырған осраҡта планшеты булған автоинспекторҙың смартфон йөрөткән водитель менән аңғәмәләшеү ваҡыты ярайһы уҡ ҡыҫҡара. Сөнки бер гаджетты икенсеһенә яҡын килтереү ҙә етә, унда бөтә мәғлүмәт яҙылып сыға. Мәҫәлән, юл-транспорт ваҡиғаһын йәки юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоуҙы теркәү ваҡыты биш минутҡа ҡәҙәр ҡыҫҡара", - тип баҫма ЮХХДИ башлығы урынбаҫары Владимир Швецовтың телмәренән өҙөмтә килтерә. Дәүләт автоинспекцияһының ошондай башланғысы Рәсәй Президентының 2018 йылдағы май указы һәм документтар әйләнешен һанлаштырыу менән бәйле.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған киңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Невралгия

❖ Меңъяпраҡ бил һыҙлауы һәм невралгияһынан ярҙам итә. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙаҡ та үтмәҫ, ауыртыу баҫылыр.

## Һалҡын тейгәндә...

❖ Ауырый башлағанығыҙҙы тойғас та ҙур ғына бер һуғанды ҡырғыстан үткәреп, юрған аҫтында һуған менән тын алырға. Сәғәт һайын ҡабатларға. Ауырыу ныҡ аҙып өлгөрһә, ошо процедураға өҫтәп һуған һутына манылған мамыҡты ҡолаҡҡа ҡуйырға.

❖ Тымаулап торһағыҙ, танау ҡыуышлығын яңы ғына бешерелгән сәй менән сайығыҙ. Балаларҙың танауын сайыу өсөн уларҙы ҡабырғаһына һалырға һәм ауыҙ менән тын алырға ҡушырға. Процедураны энәһеҙ медицина шприцы менән эшләргә. Бынан һуң танауҙы һемгертергә кәрәк. Әгәр ҙә ауырый башлаған көндә 5 тапҡыр эшләһәгеҙ, тымау өс көндә үтә.

❖ Ангинаны әрем (полынь) төнәтмәһе яҡшы дауалай. 2-3 сәғәт һайын тамаҡты сайҡатырға кәрәк.

## Йүткереү

❖ Йүткереүҙе баҫыу, бронхит, трахеитты дауалау өсөн айва ҡулланығыҙ. Ярты литр йылымыс һыуға 5-10 грамм айва орлоғон һалып, масса ҡуйыра башлағансы һелкетергә. 30 минут төнәткәс, тәменсә бал өҫтәргә һәм сәй итеп эсергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр, ашар алдынан хәлегеҙ яҡшырғансы эсегеҙ. Йүткереүҙе банан дауалай. 2 ныҡ бешкән бананды эмаль һауытта иҙеп, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, болғатырға һәм бер аҙ талғын утҡа ҡуйып йылытырға. Бал өҫтәргә һәм йотомлап эсергә.

## Һары һыу ауырыуы

❖ Һары һыу ауырыуын (асцит) петрушка дауалай. 800 грамм петрушканы эмаль һауытҡа һалып, 1 литр һөт ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, һөҙөргә һәм сәғәт һайын 1-2 ҡалаҡ эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Йоҡлар алдынан олатайымдың һөйләгән әкиәттәрен тыңларға ярата торғайным. Ул бер ваҡытта ла бер әкиәтте ике тапҡыр ҡабатламаны, уларҙың һәр ҡайһыһы яңы, оптимизм һәм изгелек менән һуғарыла ине.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

## Ислам диненә бәйле тыйыуҙар:

- Һауа торошо ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, уға ризаһыҙлыҡ белдерергә ярамай - был Аллаһ әмере.
- Һыуҙы тәһәрәт алғанда, мунса ингәндә күп тотонмайҙар, уның гонаһы ҙур. Күп тотонһаң, теге донъяла Кәүсәр йылғаһынан һыуҙы аҙ бирерҙәр.
- Шәмбе - мосолмандар өсөн ҡоро көн. Был көндө эш башламайҙар, юлға сыҡмайҙар. Шулай уҡ ай һуңында ла эш башламайҙар.
- Эскә һәм һул яҡҡа ятып йоҡламайҙар.
- Эңер төшкәндә, ҡояш байығанда йоҡларға ярамай - был шайтандарҙың йөрөгән мәле.
- Яңылыш гонаһ ҡылып, тәүбә иткәндән һуң, ҡабаттан гонаһлы эш эшләмәйҙәр.
- Атай-әсәйгә исеме менән өндәшмәйҙәр, гонаһ һанала.
- Ҡөрьәнде, изге китапты кендектән түбән тоторға ярамай, юғарыға һалып уҡыйҙар.
- Дини китапҡа тәһәрәтһеҙ ҡағылырға ярамай. Уҡыр булһаң, таҫтамал кеүек берәй сепрәк аша тотоп уҡырға кәрәк.
- Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡан ғәмәлдәрен үтәмәгән кешегә ышанырға ярамай.
- Ямандан яҡшы тыуған икән, тип уйлап, гонаһлы булма, тигән Бәйғәмбәребеҙ.
- Йәне булғандарҙы һүрәткә төшөрөргә ярамай. Тәбиғәт, тау кеүек күренештәрҙе - ярай.
- Хәрәм булған ризыҡты ашарға ярамай: сусҡа ите, бисмиллаһыҙ һуйылған мал, үләкһә һ.б.
- Ҡанды, иҫерткес эсемлектәрҙе эсергә ярамай.
- Тырнаҡты утҡа яғырға ярамай, уны бисмилла әйтеп ергә күмәләр.

## Һөнәр эйәләренә ҡағылған тыйыуҙар:

- Ҡурайсы ҡурайҙа уйнағанда күҙен йомоп һәм тыпырҙап тороп уйнарға тейеш түгел.
- Бейеүсегә бейегәндә сәс толомдары менән уйнау ярамай.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Аҙағы).**

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

Быңдай тыйыуҙар халыҡта балаларҙы төрлө хәүеф-хәтәрҙән, насар ғәҙәттән тыйыу өсөн файҙаланылған. Әммә нигеҙһеҙ түгелдәр. Быңдай тыйыуҙар туранан-тура ла, кинәйәләп тә әйтелә. Мәҫәлән, тирләгәндә шишмәнән ятып һыу эсергә ярамағанлығы ни өсөн икәне асыҡ. Ни өсөн, әйтәйек, бала башына тас йәки биҙрә кейеп ҡараһа, шаҙра була? Был фәҡәт тыйыу өсөн ҡулланылған алым. Тастың да, биҙрәнең дә төбөндә һәр төрлө бысраҡ ҡалыуы, бала башына кейеп уйнаған саҡта сәсенә, күҙенә эләгеүе ихтимал. Баланың, ярамай, тигәнде ҡабул итмәгән, дөрөҫөн зиһененә һеңдерә алмаған йәшендә ошондай ҡурҡыныс һөҙөмтә булыуы тураһында уйҙармалар менән аңлатҡандарҙыр.

Бар ундай тыйыуҙар халыҡта һәм, нигеҙҙә, урынһыҙ түгел. Һәр хәлдә, был тәрбиә ысулдарының һәр береһе буштан килеп сыҡмаған. Ошондай тыйыуҙарҙан, мәҫәлән, "Тыш яҡтан тәҙрәнән ҡарама, яҡының үлә" - был да әҙәпкә өйрәтеү алымы. "Ишектән ингән саҡта тупһаға баҫма, тупһа ҡарғап ятыр ти". Әлбиттә, өйгә ингән һәр кеше тупһаға баҫып инә башлаһа, тупһа менән ҡуша ишек яғының ҡаҡшауы ихтимал. Ишек яғы өй бүрәнәләренә беркетелә. Тимәк, билдәле, өй стеналарына ла зыян итәсәк. Быны бәләкәй балаға нисек аңлатаһың? Әлбиттә, ул аңлай алырлыҡ "аҡыл" уйлап табыла.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ӨФӨ БАШҠОРТО

**Ул туған тел ҡәҙерен, әсә теле бәҫен, милләт тойғоһон башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ аңлай һәм тоялыр, моғайын. Юҡ, журналист булғаны, һәр ваҡыт һүҙ менән, кешеләр менән эшләгәнгә түгел, ә уның сәбәптәре тәрәндәрәк ята. Беҙҙең менән ошо сәбәптәрҙең серен эҙләгегеҙ киләме? Улайһа, әйҙәгеҙ, бергәләп билдәле журналист, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре Азат ҒИЗЗӘТУЛИН менән әңгәмәләшәйек.**

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## үҙ рухыбыҙҙан мәхрүм итмәйек



**➔ Бөтөн нәмә ғаиләләге тәрбиәнән килә, тиҙәр. Ғаиләлә ниндәй тәрбиә алдығыҙ, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡый инегеҙме, ғаиләлә башҡортса һөйләштегеҙме?**

- Туған телемә һөйөүҙе миндә, тәү сиратта, олатайым менән өләсәйем тәрбиәләне. Ҡағыҙға төшөргәнен ашыҡмай, шым ғына итеп уҡый торғайны олатайым - билдәле башҡорт яҙыусыһы Ибраһим Ғиззәтуллин. Ә Зөләйха өләсәйем олатайым әйткәндәрҙе күпте күргән баҫыу машинкаһында шапшәп итеп баҫа. Бына шулай телдең интонацияһы, уның һуты әсә һөтө кеүек һеңә барҙы миңә сабый саҡтан. Йоҡлар алдынан олатайымдың һөйләгән әкиәттәрен тыңларға ярата торғайным. Ул бер ваҡытта ла бер әкиәтте ике тапҡыр ҡабатламаны, уларҙың һәр ҡайһыһы яңы, оптимизм һәм изгелек менән һуғарыла ине. Һуғыштан беренсе дәрәжә инвалиды булып ҡайтҡан, ҡулдары ла, аяғы ла хәрәкәтләнмәгән, яҙыуын бары тик иң яҡын кешеләре генә таныған ҙур кәүҙәле ир-уҙаманының йөрәгендә шул тиклем изгелек, ихласлыҡ, талант һәм иң мөһиме, үҙенең бәләкәй ватанына - Ишембай районының Түбәнге Әрмет ауылына, яҡташтарына, мәҙәниәтенә, теленә иҫ киткес һөйөү йәшәүенә аптырай торғайным.

Ә өләсәйемдең мейестә бешергән икмәге менән яңы ғына һауылған һөт - ул да беҙҙең дөйөм мәҙәниәт. Ошо хуш еҫле икмәктең өҫтөнә башҡорт балы яғып ашау, моғайын, тормошомдағы иң тәмле деликатес булғандыр. Был ризыҡтың ләззәте менән бер нәмә лә тиңләшә алмай. Шулай уҡ ҡустым һәм минең менән сабый ваҡытыбыҙҙа уҡ туған телебеҙҙә һөйләшкән атайым менән әсәйемә рәхмәтлемен.

**➔ Ҡайһы мәктәптә белем алдығыҙ, уҡыу йылдары ни яғы менән хәтерегеҙҙә ҡалды?**

- 4 синыфты ауылда, башҡорт мәктәбендә тамамланым. Өфөгә күскәс, ғәҙәти ҡала мәктәбендә уҡыным. Бында башҡорт теле лә, уңайлы мөхит тә юҡ ине. Акцент менән һөйләшкәнем өсөн синыфташтарым "Башкиренок" тип йөрөттө, әммә мин быға үпкәләмәнем дә, үпкәләргә ваҡытым да булманы. Синыф етәксеһе - рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, милләте буйынса украинка Ксанна Григорьевна акцентымды бөтөрөү маҡсатында мине кластың политинформаторы итеп билдәләп ҡуйҙы. Һәр иртән киоскыға барып, яңы гәзиттәр һатып алып, синыфташтарымды сәйәси хәлдәр менән таныштыра инем. Әммә һаманға тиклем синыф етәксемдең: "Бер ваҡытта ла үҙеңдең туған башҡорт телен онотма!" - тигән кәңәшен иҫләйем. Икенсе йылына, 116-сы мәктәпкә күскәндә, рус теле буйынса бер ниндәй ауырлыҡ тойманым һәм белемем буйынса ла рус балаларынан айырылмай инем. Был юлы ла синыф етәксеһенән уңдым - рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Надежда Алексеевна Четвертнева йөҙәтмәй, баҫалҡы ғына итеп, Пушкин, Толстой, Чехов һәм Достоевский менән бер рәттән, Айтматов, Мостай Кәрим әҫәрҙәре геройҙарына ғашиҡ иттерҙе. Надежда Алексеевна ҡайһы берҙә мине башҡортса шиғыр һөйләтә торғайны, уға телебеҙҙең моңо, яғымлылығы, əһәңе оҡшай ине. Минеңсә, телде һәм әҙәбиәтте шулай ғына яратырға һәм яраттырырға мөмкин.

**➔ Һеҙҙең бала саҡтағы Өфө менән бөгөнгө Өфө ныҡ айырыламы?**

- 90-сы йылдарҙа Өфө урамдарында башҡортса бик һөйләшмәйҙәр ине, баш ҡала ла хәҙергеһенән ныҡ айырылып торҙо. Ҡала километрҙарға һуҙылған тығындарҙа тонсоҡманы, Салауат Юлаев проспекты саҡ төҙөлә генә ине әле. Урамда йөрөгәндә теге йәки был биналағы, магазин йәки учреждениеларҙағы алтаҡталарҙан башҡортса атамаларҙы уҡырға ярата инем. Бөгөн, әлбиттә, бөтөнләй икенсе күренеш, баяғы алтаҡталарҙа әллә ниндәй аңлашылмаған телдә яҙылған яҙыуҙар урын ала бара. Һәр хәлдә, 90-сы йылдарҙағы ирекләк, үҙгәрештәр менән ниндәйҙер романтика ла юҡҡа сыҡты кеүек.

**➔ Өфөнөң Башҡортостандың баш ҡалаһы икәнлеге тойоламы? Эйе икән - нимәлә, юҡ икән - нимә эшләргә кәрәк...**

- Өфөлә бөгөн барыһы ла бар кеүек, әммә Салауат Юлаев һәйкәле майҙанынан, Дуҫлыҡ монументынан, мәсеттәр һәм бер нисә музейҙан башҡа, ҡунаҡтарҙы алып барырлыҡ урындар юҡлығы эсте бошора. Беҙҙә хатта башҡорт аш-һыуы әҙерләнгән махсус рестурандар ҙа юҡ. Һуңғы ваҡытта сауҙа нөктәләрендә, йәрминкәләрҙә башҡорт балы менән бер рәттән, ҡорот, ҡымыҙ, ҡыҙыл эремсек һатып алыу мөмкинлеге булыуы ҡыуандыра. Шулай ҙа тынысланырға ярамай, ошо йүнәлештә алға барырға кәрәк.

**➔ Быltыр мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе тирәләй шау-шыулы ваҡиғалар булып алды һәм улар әле лә тынмай. Хәҙер инде туған телдәрҙе уҡытыу буйынса яңы закон сыҡты, ул киң мөмкинлектәр бирә, әммә күп нәмә ата-әсәләрҙең теләгенән тора. Ошо хаҡта ниндәй фекерҙәһегеҙ?**

- Мин туған телен белмәгән кешене ҡараңғыла һәрмәнеп китеп барыусы кешегә оҡшатам. Ә кешенең тормош юлы, белеүебеҙсә, шыма, тура ғына түгел. Ләкин, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙе алдамай ғына дөрөҫлөктөң күҙенә тура ҡарайыҡ - бөгөн башҡорт теле өсөн көрәшеүселәрҙең күпселегенең балалары туған телендә һөйләшәме? Башҡорт халыҡ мәҡәле "Атлай белмәгән юл боҙа, һөйләй белмәгән тел боҙа", ти. Бынан ете йыл элек баш ҡала мәктәптәренең береһендә башҡорт теле дәресенә инеп ултырҙым. Бишенсе синыф уҡыусыларының башҡорт телендә вата-емерә һөйләшеүен, ябай ғына һөйләмде лә әйтә алмай ыҙаланыуын күреү күңелдә үкенес ҡалдырҙы. Быны мин туған телемдән көлөү тип ҡабул иттем. Шуның өсөн атай-әсәйҙәргә әйткем килә: балаларығыҙ тыуғандан алып улар менән тик туған телегеҙҙә һөйләшегеҙ, бергәләп китаптар уҡығыҙ, шиғырҙар ятлағыҙ, йырҙар тыңлағыҙ. Туған телдәргә яңы һулыш кәрәк. Туған телде ғәмәлдә ҡулланыу кәрәк. Мәҫәлән, телефондар, ноутбуктар өсөн башҡортса ҡушымталар, шәхси хәбәрҙәр, башҡортса уйындар күберәк булһа, балалар туған телдә һөйләшеүҙән ҡәнәғәтлек аласаҡ.

Әйҙәгеҙ, бергәләп балаларыбыҙҙың грамоталығы өсөн дә көрәшәйек. Һуңғы йылдарҙа ғалимдар ҙа, филологтар ҙа йәштәрҙең грамоталығы түбән булыуын белдереп саң ҡаға. Мәктәптәрҙә туған телдәргә һөйөү тәрбиәләү урынына, барыһын да БДИ-ға әҙерлеккә ҡайтарып ҡалдыралар. Балалар китап уҡымай, бөгөнгө интернет быуынында үҙенсәлекле клип фекерләүе үҫешкән. Уларҙың социаль селтәрҙәрҙә үҙ-ара нисек аралашҡанын уҡып ҡарағыҙ әле һеҙ! Һәр ваҡыт дәүләткә һәм власҡа япһарып, балаларыбыҙҙы туған телгә өйрәтеүҙе онотмайыҡ. Тел - ул быуындан-быуынға тапшырыла килгән халыҡ хазинаһы. Балаларыбыҙҙы ошо хазинанан, рухтан мәхрүм итеп, йөрәктәренең бер өлөшөн буш ҡалдырмайыҡ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

5

# Ғаиләм-ҡәлғәм

20-26 октябрь (ҡарасай) 2018 йыл

№42 (824)

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

## ЮЛЫҠТАН - ЮЛЫҠОВТАР

**Халыҡ юҡҡа ғына, матур ғаилә - ир күрке, тимәгәндер инде. Ғафури районы Юлыҡ ауылынан Суфия менән Рәхимйән Юлыҡовтар ғаиләһен дә ауылдаштары һәм райондаштары яҡшы холоҡло балалар тәрбиәләүселәр, район тормошонда әүҙем ҡатнашыусылар итеп белә. Республикала социаль йәһәттән әүҙем ғаиләләр араһында ойошторолған "Өлгө ал" тигән бәйгелә ҡатнашыусылар араһында уларҙың ғаиләһе лә бар. "Башҡаларға өлгө булырҙай ғаилә ниндәй булырға тейеш?" тигән һорау менән Суфия Әмир ҡыҙына мөрәжәғәт иттек.**




- Башҡаларҙан әллә ни айырылмайбыҙ, тиер инем мин. Ауыл тормошо менән йәшәйбеҙ, икебеҙ ҙә мәктәптә эшләйбеҙ. Эшең дә, көткән донъяң да матур булһа, күршеләрең, ауылдаштарың менән матур мөғәмәләлә булһаң, үҫтергән балаларың ҡыуаныстар ғына килтерһә - шул бәхет инде. Ошоға ынтылырға тейештер һәр ғаилә.

Был бәйгелә социаль әүҙемлек тәүге урынға ҡуйыла. Ирем - Рәхимйән Шакирйән улы урындағы йәмәғәт ойошмаһы "Юлыҡ" территория йәмәғәт үҙидаралығы рәйесе. Ойошма ярҙамы менән ер пайҙарын бүлеү һәм теркәү эшмәкәрлеге үткәрелде. Халыҡ әүҙем бит ул беҙҙә. Бер эште тамамлаһаң, икенсе идеялар тәҡдим итеп кенә торалар. 2017 йылда ошо уҡ ойошма "Олатайҙарға - һәйкәл, ейәндәргә - спорт майҙансығы" проекты менән Рәсәй Президенты грантын отто. Уның сиктәрендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына обелиск ҡуйылды, парк менән спорттың уйын төрҙәре өсөн майҙансыҡ кәртәләп алынды. Быйыл тағы грант оттолар һәм киләһе йылдың февраленә тиклем универсаль спорт майҙансығы төҙөп ҡуйырға ниәтләнеп торалар: йәйгеһен унда мини-футбол, баскетбол, волейбол, ә ҡышын хоккей уйнарға мөмкин буласаҡ. Был спорт паркы халыҡҡа ял итеү урыны булыр ине. Үҙем ауылдың "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһемен. Ҡатын-ҡыҙ - ул ғаилә тотҡаһы, донъя тотҡаһы. Заманы шулайға әйләнеп китте, ирегеттәр башлап йөрөй торған эштәрҙә лә беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, алдан йүгерәбеҙ. Әммә борондан әсәй һүҙе, ағинәй һүҙе тигән абруй ҙа булған башҡорт ҡатындарында, бөгөн ошоно ла тормошобоҙға ҡайтарырға ине.

Ике ҡыҙ үҫтергән әсәй булараҡ, тәрбиә эшендә алтын бер ҡағиҙә менән уртаҡлашырға теләйем. Улдарҙы ла, ҡыҙҙарҙы ла, тәү сиратта, яратырға кәрәк. Улар ниндәй генә осраҡта ла яратасағыбыҙҙы белергә тейештәр. Ҡалғаны иһә ошонан сығып үҙенән-үҙе һалына. Уҡытыусы булараҡ, ҡыҙҙарыбыҙҙың уҡыуына иғтибар бирә инек. 9 йыллыҡ Юлыҡ мәктәбен тамамлағас, Красноусол башҡорт гимназияһында уҡынылар, икеһе лә миҙалға тамамланы. Өлкәне Өфө дәүләт медицина университетында белем алды, табип, бөгөн кейәү менән Урал исемле ул үҫтерәләр. Беҙгә олатай-өләсәй бәхетен татыттылар. Кесе ҡыҙыбыҙ инженер, Өфө дәүләт нефть техник университетында уҡыны. Бигерәк әүҙем, Ғафури районы йәштәре берлеге, Башҡортостан яҡташтар ассоциацияһы менән берлектә "Урал мираҫы", "Аҫылташ" кеүек форумдар, төрлө саралар үткәрәләр, проекттарҙа ҡатнашалар. Ҡыҙ кеше инсафлы булһа, уға тормошта йәшәүе еңел була, тип гел әйтеп торҙом ҡыҙҙарыма. Артыҡ тыйманыҡ та, конкурс, тип сит төбәктәргә лә сығып киттеләр. Тиҫтерҙәре менән аралашыуҙа ла сикләмәнек. Икеһе лә аталарына оҡшап математикаға һәләтле. Улар өсөн тәүге урында - аталары. Уны ныҡ яраталар, ихтирам итәләр. Иң тәүҙә аталары менән кәңәшләшәләр. Атайҙарҙың ҡыҙ балаларҙы икенсе төрлөрәк - наҙлыраҡ, матурыраҡ яратыу менән баҡҡанын беләм хәҙер. Ғөмүмән, ғаиләбеҙҙә атай - баш, беҙ уның артындараҡбыҙ. Башҡорт ғаиләләрендә шулай булырға тейештер ҙә инде...

РИЗАИТДИН НӘСИХӘТТӘРЕ

*Тәнегеҙ үҫеп, көс кергәс, ҡулығыҙҙан килгән эштәрҙә ата-әсәгеҙгә ярҙамсы булығыҙ. Улар ҡартайғас, уларға һис асыуланмағыҙ. Шәфҡәт һәм хеҙмәттәрегеҙҙе тағы ла арттырығыҙ, сөнки улар һеҙҙе бәләкәй булғанығыҙҙа, йәш ваҡытығыҙҙа, тәрбиәләп үҫтерҙе. Бер көн һеҙ ҙә атай булырһығыҙ, уйлап ҡарағыҙ, балаларығыҙ хөрмәтегеҙҙе һаҡламаһа, быға риза булырһығыҙмы? Рәсүл Әкрәм саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм әфәндебеҙ хәҙрәттәре: "Аталарығыҙға изгелек итһәгеҙ, һеҙгә балаларығыҙ изгелек итер", - тип әйткән. Ҡайһы бер бала шулай була. Атаһының тәрбиәһендә, мәрхәмәттәре күләгәһендә рәхәт-рәхәт үҫә лә, үҫкәс, атаһының фекерҙәренә ҡаршы килә, һүҙҙәрен ишетмәй, уларҙың ғәмәлдәрен аҙ тип күлә (Һеҙ шулай инсафһыҙ булмағыҙ). Атайығыҙ иһә һеҙҙең өсөн яуаплы булмай, бәлки улар өсөн һеҙ яуаплы буласаҡһығыҙ. Көн артынан көн үтеү менән, ғилемдәр алға барыу сәбәпле, бөгөнгө бөйөк ғалим иртәгә шәкерт дәрәжәһендә ҡалыуы тәбиғи. Ярамаған эш ҡушҡан ваҡытта һис тарһынмай һәм күңелде йәрәхәтләмәй, киреһенсә, әҙәпле, инсафлы итеп, эштең дөрөҫөн белдерергә тырышығыҙ.*

УЙЛЫҒА - УЙ

**Эреле-ваҡлы бала-саға урам буйлап саба, толомдары ғына елферҙәп ҡала. Араларында билен биштән быуып донъя көткәндәре лә, яңы ҡул араһына керә башлағандары ла, әсәй итәгенән саҡ төшкәндәре лә бар. Ниәттәре - тағы ла бер тапҡыр Маһия инәйҙең һиҙгерлеген тикшереп ҡарау. Ғәйшә өләсәйем көнө буйы өйҙә булмаясаҡ. Ә уның өйө алдында космея сәскәһе үҫә, беҙ шуны өҙгән булып ҡыланасаҡбыҙ. Маһия инәй күрше-күләненең ышаныслы күҙе, һаҡ ҡолағы, штатһыҙ ҡарауылсыһы. Донъяларына күҙ-ҡолаҡ булырға үтенһә-үтенмәһәләр ҙә, ул һәр саҡ һаҡта! Ә инде һынау үткәреүебеҙ- инәйҙең фиҙаҡәрлегенә бары оло хөрмәтебеҙ генә.**

## КҮҢЕЛДӘР ЗЫЯРАТЫ ҠАЙҘАН?

Беҙҙең байтаҡ йолаларыбыҙ бар. Береһе - яңғыҙ йәшәгән, кеше көнлө инәй-бабайҙарҙы бүлешеп алғанбыҙ. Беҙҙең тирәнең ҡурсауында Динислам бабай менән ире һуғышта ятып ҡалған Хәҙисә инәй. Динислам бабайға иҙәнен йыуып, һыу килтереп бирәбеҙ. Ә ул ҡыуаныстан шунда уҡ магазинға йүгерә, прәник һатып алырға. Тик ярҙамыбыҙ һис кенә лә прәник өсөн түгел, ысын күңелдән эшләнә. Хәҙисә инәйҙе ҡыҙы өйҙә булмаған сағында хәстәрләйбеҙ. Шулай ҙа уларға ярҙам итеүҙә Шәрәфулла бабайҙың ҡыҙҙарына етешкәндәр юҡ. Шәрәфулла бабай үҙе бер хикмәт. Беҙ уның күҙ осонан ысҡынғаныбыҙ юҡ. Ҡыйыш баҫһаҡ, төҙәтеп кенә тора. Ә уның иң-иң хикмәте, ҡыштың буранымы, сатлама һыуығымы - һәр саҡ матур итеп мәке уйып ҡуя.

Маһия инәй беҙҙең биләмәгә кермәй. Инәйгә ярҙамыбыҙ - йылына бер тапҡыр ғына була торған күңел байрамыбыҙ ул. Яҙ етеп, һыу таҙарып, Нөгөш үҙ ярҙарына ҡайттымы, бөтөн бала-саға һыу буйында. Оло керҙәрҙе йыуабыҙ, ҡашығаяҡты йыуабыҙ, самауырҙарҙы ялтыратабыҙ. Үҙебеҙҙекен бөтөү менән, йыйналышып, Маһия инәйгә китәбеҙ өмәгә. Өйөнән башлап, йыуа-йыуа, таҙарта торған бөтә эштәрен атҡарып бирәбеҙ. Керҙәрҙе, түшәктәрҙе сайҡатып элеүгә инәйҙең табыны ҡоролған да була. Уртала майлы бутҡа. Хистәре ташып-түгелеп, күңеле булып бөталмай, инәй бутҡа эсенә кәнфиттәр төртөп сыға. Кәнфитте айырым һурһаң, тәмле лә ул, ә бына бутҡала уның таты артыҡ кеүек. Беҙҙең ҡалаҡтар һиҙҙермәй генә бутҡаның кәнфитһеҙ ерҙәренән йөрөргә тырыша. Шулай ҙа беҙ инәйгә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Ошо күңел байрамы өсөн!

...Шул бала-сағалар ил киңлектәренә сәселдек инде. Иҫәндәребеҙ - сал сәсле өләсәй һәм олатай. Ауыл йәме - инәй, бабайҙарҙарыбыҙ гүр эйәләре, урындары йәннәттә булһын. Тик йөрәк кенә һыҙлай. Уларҙан алған күңел йылыһын ниңә беҙ бирә алманыҡ баларыбыҙға? Ҡасан, ҡай төштә ерләнек һуң ул күңел йомартлығын? "Тимур командаһынан килгән балалар аҡса һораны, биргән аҡсамды әҙһенделәр", - тигәнгә хәҙер кем икән аптырар? Әйҙәгеҙ, ошо хаҡта ла фекер алышайыҡ әле.

**Көнһылыу ҠОТЛОБАЕВА.**

***✓ Яҡын-тирәбеҙҙә шундай төрлө хәлдәр бихисап. Ир кешенең ҡатынын туҡмауы, ғаилә өсөн "ҡыл да ҡыбырҙатмай" ятыуы, йә кемеһененңдер эскелек менән мауығыуы арҡаһында булған айырылышыуҙар ғына үҙен-үҙе аҡлайҙыр.***

ҺАБАҠТАР

# АТАЙ-ӘСӘЙ ҠЫҪЫЛМАҺЫН...

**Олораҡ ата-әсәләр, дөрөҫөрәге, "ҡоҙа, ҡоҙағыйҙар" хаҡында ла бер аҙ ғына һүҙ йөрөтөп алырға ниәтем. Балалары үҙ-ара бер аҙ насарыраҡ йәшәй башлаһа, уны-быны уйлап тормай, үҙенең балаһына "айыр ҙа ебәр", йәиһә, "айырыл да ҡайт", тигән һымағыраҡ "аҡыллы" кәңәштәрен бирергә ашыҡҡан ата-әсәләр бар. Ҡыҙын кейәүенән, йәиһә улын килененән ҡыҙғанып, балаларының араһына "шына ҡатҡан" ата-әсәләр ҙә күп, үкенескә.**

Минең тәрән инаныуымса, бындай ата-әсә - төптән яңылыш юлда. Ундайҙар ғаилә мөнәсәбәтендә быҫҡып ятҡан утҡа һыу урынына кәрәсин һипкән кешегә тиң. Яҡшы кәңәш бирә алмаған, һис юғында, өндәшмәҫкә тейеш бындайҙар. Ә мин бер яҡшы ғаиләнең "ҡыл өҫтөндә" торған хәленән ҡабаттан ифрат та һәйбәт йәшәп киткән миҫалды беләм. Ниндәйҙер бер сәбәп арҡаһында хатта рәсми айырылышыу хәленә барып етте улар. Икеһе лә мөләйем, кешелекле, кеселекле, әҙәпле, ифрат эшлекле, ғаилә өсөн өҙөлөп торған был йәштәр айырым йәшәй башланы. Икеһенең дә йәндәй күреп яратҡан балалары, әлбиттә, әсә кеше ҡарамағында. Бәләкәстәрҙең "Атай, һин әсәйемә сәскә бүләк итһәң, ул һине ҡабаттан яратыр...", тип аталарын, йәиһә "Әсәй, атайым һине ярата ул", тип әсәләрен өгөтләүе хаҡында ишетеп, күҙгә йәштәр килә ине. Бына шул ситуацияға Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән йәштәрҙең ата-әсәһенең битараф булмауы, хатта уларҙың әүҙем "ҡыҫылыуы" бик тә урынлы булды. Ир менән ҡатын бер йылға яҡын бер-береһен аңлаша алмай ҡаңғырып йөрөгән мәлдә ҡоҙалар үҙ-ара ныҡ дуҫ йәшәне (хатта элеккегә ҡарағанда ла, тип әйтер инем), бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөштө. Ата-әсәһе айырылышыуға ҡайғырышҡан бәләкәстәр ҙә алмаш-тилмәш ҡартаталарында булдылар. Ғәҙәттә, ҡоҙалар араһында була торған бер-береһенең балаларын ғәйепләү тигән нәмәнең улар араһында булмауы был оло кешеләрҙең аҡыллылығының билдәһе, тип әйтер инем. Бына ошо мәсьәләлә улар бик-бик күптәргә үрнәк булырлыҡ. Ҡоҙалар бар тырышлығын фәҡәт балаларын ҡабаттан ҡушылырға өндәүгә бағышланы. Сабыйҙарҙың атайһыҙ үҫере нисек насар булыуын ваҡытында күҙаллаған был оло кешеләр ысын маҡтауға лайыҡ. Ә йәштәргә, әхмәдүлиллаһ, Аллаһы Тәғәлә ҡабаттан бергә ҡушылып йәшәргә насип иткән. Артабан татыулашып, һин дә мин бергә йәшәй башлаған был ғаиләнең алмаш-тилмәш бер-береһенең ата-әсәләренә хәл белешергә йөрөүҙәре үҙе бер бәхет бит! Инде етмешкә етеп барған аҡыллы ҡоҙа-ҡоҙығыйҙар ҙә шат. Иң мөһиме кескәйҙәрҙең "атай, әсәй" тип, үҙҙәрен бәхетле хис итеп йәшәүҙәре! Әле бәйән ителгән бына шундай киҫкен торған осраҡтарҙа ололарҙың, йәғни, ата-әсәләрҙең үҙ балаларына реаль ярҙамы тейеү мөмкинлеге лә бар, тимәксемен.

Яҡын-тирәбеҙҙә шундай төрлө хәлдәр бихисап. Ир кешенең ҡатынын туҡмауы, ғаилә өсөн "ҡыл да ҡыбырҙатмай, бисә ҡарамағында" ятыуы, йә кемеһененңдер эскелек менән мауығыуы арҡаһында булған айырылышыуҙар ғына үҙен-үҙе аҡлайҙыр. Башҡа осраҡтарҙа һәр кем айыҡ аҡыл менән фекер итеп, һәр ситуацияға ололарса, тик объектив күҙлектән сығып бағып, мәсьәләне хәл итһә, "айырылышыу" тип аталған шундай насар нәмә арабыҙҙа һирәк булыр ине. Бергәләп бала тәрбиәләп, шул уҡ ваҡытта һәр төрлө ғаилә ығы-зығыһына ла "етешеп" йәшәгән йәштәребеҙ эгоист булмаһындар ине, йәғни, фәҡәт үҙҙәрен генә уйлап ғүмер итмәһендәр ине, тигән теләк бар. Балалары хаҡына, үҙҙәренең мин-минлеген берәй "нығыраҡ урын"ға йәшереп, ҡартайғансы бергә йәшәһәләр ине. Динебеҙ, әлбиттә, ир менән ҡатындың бәғзе осраҡтарҙа айырылышыуын рөхсәт иткән, әммә, шул уҡ ваҡытта быны әллә ни хупламай. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың димселәр ярҙамында танышып та, ғүмер буйы ифрат татыу йәшәп, балалар үҫтергәнлеге хаҡында беләбеҙ. Минең атайым менән әсәйемде лә димләп таныштырғандар. Илле йыл буйы, йәғни атайым баҡыйлыҡҡа киткәнсе бергә, татыу ғүмер иттеләр. Никах мәсьәләһенә элек ифрат та етди ҡарағандар шул...

Нисек кенә булһа ла бер-береһенең үҙенсәлектәренә, ара-тирә "ҡытыршылыҡтарына" түҙеп, бар көстө балалар үҫтереп, уларҙы аяҡҡа баҫтырыуға һалған ғаиләләр ҙә күп булыуы һөйөндөрә. Бындай ғаилә башлыҡтарына ҡарата шундайын да ныҡ ихтирам тойғоһо уяна. Тик ана шундай ғаиләлә үҫкән бәғзе балаларҙың да, ҡанаттары нығынып алғас, олоғайған ата-әсәләренә ҡарата иғтибарһыҙ булыуы эсте көйҙөрә. Быныһы инде балаларға ҡарата һуҡраныуым... Изге Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә ата-әсәгә ҡарата иң яҡшы мөғәмәләлә булырға ҡуша. Ата-әсәһен хөрмәт иткән кешеләрҙең, ваҡыты еткәс, үҙ балаларынан яҡшылыҡ күрәсәге хаҡында әйткән Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм хәҙисе лә бар. Әгәр ата-әсә үҙҙәре иман юлында булып, балаларына имани тәрбиә биреүгә өлгәшһә, ейән-ейәнсәрҙәре лә үҫә-килә бына ошо хаҡта һис шикһеҙ беләсәк һәм мин юғарыла миҫал итеп килтергән һәр төрлө күңелһеҙ хәлдәр ҙә булмаҫ. Быуындан-быуынға шундай традиция күсә килһә, һәммә өйҙә ныҡлы ғаиләләр, бәхетле балалар һәм ата-әсәләр булыр, иншаллаһ.

**Һөйөндөк ҠЫУАНДЫҠОВ.**

**Бала саҡ, урамда уйнап туймаған ваҡыттар, ә ҡайсаҡ бер-берең менән (айырыуса малай кешеләрҙең) сәкәләшеп, хатта пыр туҙып һуғышып киткән мәлдәр кемдең генә хәтерендә һаҡланып ҡалмаған икән. Ғүмерҙең ифрат та тиҙ үтеп китә торған шул осорон йыш ҡына һағынап иҫкә алаһың. Ҡасандыр танауын ҡанатҡан, йә иһә күҙ төбөн күгәрткән берәй балалыҡ дуҫыңды осратаһың да, ҡосаҡлашып, күрешеп, хәл-әхүәл һораша башлайһың, бала саҡ хәтирәләрен көлөшә-көлөшә иҫләп, кемуҙарҙан һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй...**



# АТАЙЫҢА ОШАҠЛАМА!

Хәҙерге быуын малайҙары ла, моғайын, тап шулай, талаша-яраша үҫеп киләләр, тип уйлайым. Бына шул бала сағымды иҫләһәм, ғүмерҙең иң вайымһыҙ, иң бәхетле ваҡыты булған икән, тип уйлайым. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙемдең иң ныҡ ҡыйынһынған мәлдәрем дә хәтеремә төшә. Миңә ҡарағанда ҙурыраҡ, йәиһә көслөрәк малайҙарҙың ҡыйырһытыуы хаҡында һүҙ бара, тип уйлаһағыҙ - хаталанаһығыҙ! "Хәҙер өйөңә ҡайтып, атайыңа ошаҡлаясаҡһың инде..." - тип үртәһәләр, бына шуны ғына ифрат та ауыр кисерә инем. Сөнки, тере атайым булыуына ла ҡарамаҫтан, үҙ ғүмеремдә бер ҡасан да уға кемделер ошаҡлағаным булманы. Ни өсөн, тиһегеҙме? Ғыры бар бит әле, нәҡ шундағы һымаҡ:

*...Саманан тыш*
*бик уҙынып китһәк,*
*Йә туҙынап китһәк әрептә,*
*Ошо сыбыҡ бер*
*һыҙғырыу менән*
*Һала ине беҙҙе тәртипкә...*

"Урам буйында һуғышып йөрөмәгеҙ, кеше көлдөрөп", тип, атайымдың һәр саҡ иҫкәртеп тороуҙары әле булһа ҡолағымда сыңлай. Үлем түшәгендә ятҡанда ла, васыят итеп ҡалдырҙы ул был һүҙҙәрҙе. Урамда кемдер саманан артығыраҡ ҡыйырһытып, бигерәк ауыр булып киткән мәлдәрҙә, яҡлау эҙләп, тик әсәйемә генә бер-ике тапҡыр ошаҡлашҡаным хәтеремдә. Әлеге мине туҡмаған малайға барып ашап, кейенә лә, икәүләп, көлөшә-көлөшә тышҡа сығып йүгерәбеҙ... Кисә беребеҙҙе лә яҡлашмай, беҙ һуғышҡанды тамаша ҡылып ҡарап торған өсөнсө дуҫыбыҙға. Оҙон ҡыуалдарыбыҙҙы иңбашыбыҙға һалып, өсәүләшеп, Таналыҡ буйына балыҡҡа китәбеҙ...

Әлбиттә, бәғзе бер малайҙарҙың атаһы үҙенең улын яҡлашып, ҡолаҡ-молаҡты борғолап, "Атаң өйрәтмәһә, мин һине өйрәтермен!" тип, "аҡылға ултыртып" киткеләгән хәлдәр ҙә булманы түгел. Йәиһә, һуғышҡан малайҙарҙың әсәләре урам яңғыратып үҙ-ара тиргәшкән мәлдәрҙе лә иҫләйем. "Бола"ның башлығы булған ике малай, алдараҡ әйтеүемсә, шунда уҡ ҡабаттан дуҫлашып та китә, ә бына оло кешеләр... Үҙем бәләкәй булғанғалыр, балаларының араһына төшөп, конфликтҡа килгән ата-әсәләр һуңынан үҙ-ара нисек ярашып китә алғандарына иғтибар иткәнем булманы. Әммә хәҙерге оло кеше күҙлегенән сығып ҡарайым да, был ата-әсәләрҙең ҡабаттан тиҙ генә татыулашып киткәнлегенә бик икеләнәм. Улар бит эскерһеҙ сабый бала түгел. Кескәй балалары арҡаһында ғына ауылдаштары, йәғни, ғүмер буйы аралашып йәшәгән кешеләр менән ыҙғышыусы ата-әсәләрҙе ошо көнгә тиклем аңлап етмәйем. Хәләл ефетем менән үҙебеҙ ҙә ике ул үҫтерҙек. Уларҙың йә береһе, йә икенсеһе күҙҙәренә (малайҙарса әйтмешләй) "фонарь элеп" ҡайтҡылаған мәлдәре булды. Әммә, һис бер ваҡытта ла малайҙарымды яҡлашып, уларҙың дуҫтарына, йәиһә ата-әсәләренә барғылап, мөнәсәбәт асыҡлап йөрөмәнем. Үҙҙәренең улдарын ҡурсалап, өйгә килгән ҡайһы бер ата-әсәләр менән дә бик ипле, йомшаҡ ҡына һөйләшеп, килеп сыҡҡан ситуацияға "һыу һибеп", көйләп ебәргеләй торғайным. Ә үҙ балаларыма, әлбиттә, "бер-берегеҙҙе яҡлашығыҙ", тип кенә өйрәтә килдем.

РИЗАИТДИН НӘСИХӘТТӘРЕ

*Киләсәктә хөрмәтле һәм файҙалы кеше булыуығыҙҙы ата-әсәгеҙ һәр ваҡыт өмөт итә һәм Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәренән һорай. Инде һеҙ бындай изгелектәргә ҡаршы яуызлыҡ итеүсе булмағыҙ. Шулай уҡ уларҙың нәсихәттәрен ҡурҡып һәм өркөп түгел, ә мөхәббәт һәм ихласлыҡ менән тотоғоҙ. Сөнки улар был донъя хәлен ҙур тәжрибәләре менән яҡшы аңлай һәм һеҙ белмәгән күп серҙәрҙе белә. Кешенең итәғәтле (буйһоноусы) булыуы уның яҡшы күңелле булыуын күрһәтә. Һеҙгә лә иң яҡын кешеләр - ата-әсәгеҙ. Шуның өсөн уларға һәр ваҡыт итәғәтле булығыҙ. Ғәмәл һәм һүҙҙә уларға ҡаршы килмәгеҙ. Ошо сәбәптән уларҙың күңеленә рәхәт булыр, үҙегеҙҙең күңелегеҙ һәм тормошоғоҙ ҙа гүзәл булыр.*

Сөнки малайҙарының (ғаиләлә дүрт малай үҫтек) урам буйында һуғышып йөрөүе - атайымдың ныҡ асыуын килтерә ине. Хатта берәйебеҙ кемдәндер туҡмалып ҡайтҡан осраҡта ла, был хаҡта атайым белеп ҡала икән, беҙҙең үҙебеҙгә үк тағы унан "әләгә". "Башҡалар менән һыйышмаған" өсөн. Өйөбөҙҙөң түбә өрлөгөнә ҡыҫтырылап ҡуйылған селек сыбыҡ ошоғаса күҙ алдымда. Үҙ-ара әрепләшә башлаған өсөн дә ҡулланыла ине ул ҡайсаҡ. Әнғәм Атнабаевтың "Аҡыл сыбығы" тип аталған бер шиғыры... "кәрәген" бирһә ине, тигән теләгем була торғайны ҡайсаҡ. Тик әсәйем дә мине йыуатыуҙан үтә алмай ине... Малайҙарына ҡарата атайымдың да, әсәйемдең дә шундай позиция тотоуҙарының хаҡлығын аҙаҡтан ғына аңланым. Ысынлап та, әлеге үткән "яу"ҙың иртәгеһенә үк, таң менән тороп, теге иптәшемдең өйөнә киләм. Кисә генә ҡанға туҙышҡан хәлдәр бөтөнләйгә онотолған! Дуҫыма булған асыуымдың бер нәмәһе лә ҡалмаған. Ә бит дуҫым да, мин өйҙәренә килеп инеү менән, ашыҡ-бошоҡ

✓ ***Бала тәрбиәләгән әсә атай ролен үҙенә алырға мәжбүр... Тик ниндәй генә яҡшы әсә булмаһын, ул бер ваҡытта ла атай була алмай инде, күпме генә тырышһа ла. Ә бала кеше һәр саҡ атайға мохтаж.***

## РИЗАИТДИН НӘСИХӘТТӘРЕ

*Ата-әсәгеҙ алдында бик әҙәпле булығыҙ, уларҙың һүҙҙәрен яҡшы тотоғоҙ, өйрәткәндәрен аңлағыҙ, улар менән артыҡ ҡысҡырмай, әҙәпле, асыҡ һөйләшегеҙ. Улар аяҡ өҫтөндә торған ваҡытта һеҙ ҙә ултырмағыҙ!*

*Баһадирлыҡ - әҙәм балаларында хөрмәтле бер сифат.Ололар мәжлесендә булып, уларҙың хикмәтле һүҙҙәрен ишетеү аҡылды арттыра һәм ғилемде күбәйтә. Хатта кесе балаларҙы бөйөк кешеләр мәртәбәһенә яҡынайта. Шуның өсөн йәрәкһеҙ балалар кеүек атайығыҙ мәжлесендә ултырыуҙан ҡурҡмағыҙ һәм белмәгән, аңламаған нәмәләрегеҙҙе уларҙан һорағыҙ, һәр нәмәнең асылын белергә тырышығыҙ.*

Минең инаныуымса, малай кеше - буласаҡ ир-егет, үҙен үҙе, хатта башҡаларҙы яҡлаша белергә тейеш. Һәр саҡ үҙен ата-әсә ҡанаты аҫтында, "йылы"ла тойоп үҫкән малайҙың, үҙаллы тормошҡа сыҡҡанда, артабан аҙым һайын осраған һәр төрлө ауырлыҡтарға (медицина теле менән әйткәндә) иммунитеты ла булмай. Был уның өсөн бер ҙә генә яҡшы түгел. Бына шундай егеттәр, ваҡыты еткәс, әрме сафына килеп эләгә. Ә унда, һәммәбеҙ белеүебеҙсә, "замполит нам - мать родная, командир - отец родной..." Уларҙан күпкә уҫалыраҡ "дедушка"лар бар. Әлеге әйтмешләй, бала саҡтан үҙен яҡлаша алмаған, мәшәү булып үҫкән егеткә хәрби хеҙмәттән дә ауыр нәмә донъяла юҡ һымаҡ булып тойола ла инде. Тик командирҙар, замполиттар (хәҙергесә - тәрбиәселәр), психологтар һәм хәрби табиптар уларҙың яҡлашыусыһына әүерелә. Уҫал "бабайҙарҙан". Бәғзе егеттәр һәр төрлө шундай һынауҙарға түҙә алмай, дезертирлыҡ юлына баҫыуға, хатта суицид һымаҡ нәмәләргә лә барып етешә. Ярты ғүмерен хәрби хеҙмәткә бағышлаған кеше булараҡ, ошо темаға бер аҙ төшөп, баш һүҙемдән тайпылыбыраҡ киттем шикелле, ҡәҙерле дуҫтар. Малайҙарға ысын ир-атҡа хас тәрбиә биреү хаҡында һүҙ барғанда, әрме хеҙмәте үҙенән-үҙе күҙ алдына килә лә баҫа бит әле, ауыҙыңа май булғыры...

Ә бына ҡыҙҙар мәсьәләһенә килгәндә, минең фекерем бөтөнләйгә башҡа, хатта тәүгеһенә ҡапма-ҡаршы ла тиерлек. Һүҙбашыма ҡабаттан әйләнеп ҡайтайым. Балалар үҙ-ара "сәкәләшкәндә" малай кешене аралап атаәсәһенең ҡыҫылмауы ягында булыуым хаҡында әйтеп үткәйнем. Минең ныҡлы инаныуымса, малайҙарҙан айырмалы, ҡыҙ балалар һәр саҡ яҡлашыуға мохтаж. Үҙен кемдәндер ҡанаты аҫтында, һаҡлаулы булыуын тойоп, шул уҡ ваҡытта үҙе лә назлы һәм йомшаҡ күңелле булып үҫергә тейеш ул. Ҡатын-ҡыҙы ҡатын-ҡыҙ иткән ана шундай иң мөһим сифаттар һәр ҡыҙҙа тәрбиләнергә тейештер, тип уйлайым. Башҡалар ситнәтә икән, атай кеше үҙенең ҡыҙын, ә ағаһы - һеңлекәшен бер ҡасан да иғтибарҙан, яҡлашыуҙан мәхрүм итергә тейеш түгел. Әлбиттә, ҡыҙый нимәләр үҙе ғәйепле икән, "сеп-сей" булып яҡлашыу - урынһыҙ. Башта килеп тыуған ситуацияны дөрөҫ аңлап, уға ғәҙел баһа биреү, ҡыҙҙың (һеңлекәштең) бигүк тоғро юлда булмағанын аңлатыу мотлаҡ. Шунһыҙ, башҡаларға ҡарата ғәҙелһеҙлек ҡылыуын бар. Мәктәпкә барып, ҡыҙыңды ҡыйырһытҡан малайҙар менән "ирҙәрсә" һөйләшеп алыу (колаҡ бороу ысулы менән түгел!), уҡытыусыларының иғтибарын да быға йүнәлтеү ифрат та кәрәк нәмә. Һыу һибеп, ҡәҙерләп үҫтереүгә мохтаж булған сәскә менән сағыштырам мин һәр саҡ ҡыҙ баланы. Ә инде уны эшкә, тәртипкә өйрәтеү - әсә кешенең төп бурысы тип һанайым. Был юҫыҡта әсәнең ҡыҙына ҡарата бер аҙ етдилеге лә кәрәктер. Сөнки бер нәмәгә лә өйрәнмәгән ҡыҙ балаға тормошта ифрат та ауырға тура киләсәк. Ниндәйҙер бер нәфис фильмдағы һымаҡ, кейәүгә сыҡҡас, иренә "иртәнсәк - яичница, төш - яичница, кисен - яичница, ә төндә - омлет" бешереп ултырыусы килен булып үҫеүе лә бар, әғүҙү билләһ!

Үҙемдең ҡыҙҙарым булмаһа ла, ейәнсәрҙәрем үҫеп килә хәҙер. Бына ошо мәсьәләлә минең менән риза булмаусылар табылыуына ла шигем юҡ, сөнки хәҙер бик күптәр ҡатын-ҡыҙ ҙа ир-егеттәр һымаҡ көслө, "тәртә артында йөк тартып" барыуға ла һәләтле булырға тейеш, тип һанай. Ә минең уйымса, һәр ҡыҙ бала ғаиләлә һәм мәктәптә яҡлау табып, ир-егеттәрҙең ышаныслы терәк икәненә инанып үҫергә тейеш. Уның буласаҡ ирендә лә үҙен ел-ямғырға тигеҙмәҫтәй кешене күрергә тырышыуы - тәбиғи. Әгәр ҡатын-ҡыҙҙа кескәй сағынан уҡ ир-атҡа ҡарата шундай ихтирам һәм хөрмәт тойғоһо һалынған булһа, ире өсөн унан да яҡшы ҡатын булмаясаҡ. Ғаилә арбаһының дилбегәһенә (хәҙергесә - руленә) талашмай ғына, Аллаһы Тәғәлә үҙенә тәбиғәттән биргән ҡатынлыҡ бурысын еренә еткереп үтәргә тырышасаҡ ул. Был уның хатта яратҡан шөғөлөнә әйләнәсәк. Эштән арып ҡайтҡан иренә тәмле аштар бешереп, уны йылмайып ҡаршы алыуҙан йәм табып, балаларына ла йылы йөрәкле әсә булыуынан ҡәнәғәтлек кисереп, бар ғаилә мөхитен йылытып, өйгә йәм биреп ултырасағына иманым камил. Шундай ғаиләлә үҫкән ҡыҙ бала, әлбиттә, үҙенең әсәһенә ҡарап үрнәк ала. Ундай йәш ғаиләләрҙә лә бәләм. Ә инде ир кеше үҙенең ҡатынына, ҡыҙына ҡарата иң яҡшы мөнәсәбәттә булырға бурыслы. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм, ҡатын-ҡыҙға ниндәй генә асыулы булған хәлдә лә, был хаҡта белдермәскә ҡушҡан. Шундай ситуация килеп тыуа икән - ике рәҡәғәт өҫтәмә (нәфил) намаҙ уҡыу зарурлығы хаҡындағы хәҙис бар. Унан - асыуың да онотола, артабанғы тормошоң да татыулыҡ шарттарында дауам итә. Ғаиләнең бәхетен уның матди торошо ғына хәл итмәй, ә бында иң беренсе нәүбәттә - үҙара аңлашыусанлыҡ төп ролде уйнай.

Кемдер әйтмешләй, тормош - тормош инде ул, ифрат та ҡатмарлы, беҙ теләгәнсе кенә бармай. Илебеҙҙә атаһыҙ, яңғыҙ әсә ҡарамағында үҫеп килгән балалар ҙа күп. Бындай ҡыҙҙар һәм малайҙар ҙа иғтибарһыҙ ҡалырға тейеш түгел, әлбиттә. Үҙемдең яҡындарым араһында ла ошондай миҫал булыуы - үкенесле, хатта ошо мәҡәләмә тотоноуымдың сәбәптәренең береһе лә булып торалыр. Бала тәрбиәләгән әсә бындай осраҡтарҙа атай ролен үҙенә алырға мәжбүр... Тик ниндәй генә яҡшы әсә булмаһын, ул бер ваҡытта ла атай була алмай инде, күпме генә тырышһа ла. Ә бала кеше һәр саҡ атайға мохтаж. Әлеге мәшһүр шағирыбыҙ Әнғәм Атнабай бер шиғырында ошолай тип яҙған:

*Кейем юҡлығына түҙеп була,*
*Алдап була тамаҡ туҡлығын.*
*Әммә бер ни менән алыштырып*
*Булмай икән атай юҡлығын...*

Шулай ҙа, "донъяһына төкөрөп", бар нәмәгә күҙ йомоп йәшәп булмай бит инде. Тормошто нисек булһа ла алға тартып барыу кәрәк. Бына шундай ситуацияға тарыған йәш әсәгә, минеңсә, һис кенә лә ҡаушап ҡалмай, ғәзиздәренең атаһын алыштырырҙай яҡшы ир табып, балаһын (айырыуса малай кешене) уның менән бергәләп үҫтерергә тырышыу кәрәктер. Бындай ғаиләләр менән дә танышмын...

Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, ә һеҙ ошо мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ? Килеп тыуған ошондай бик сетерекле хәлдәрҙә, моғайын, бик күптәр аҡыллы кәңәшкә мохтаждыр. Тап бына ошо, йәғни, тулы булмаған ғаиләләргә ҡағылышлы мәҡәләләрҙең дә сығыуына өмөт итәм. Ә инде йәш атаәсәләргә минең үҙемдән ҡәтғи мөрәжәғәтем: бәпкәләрегеҙҙән "тере етем" яһамағыҙ! Малай кешене атай тәрбиәһенән, ә ҡыҙ баланы атай ҡурсалауынан мәхрүм итмәгеҙ! Үҙ-ара мөнәсәбәтегеҙҙә килеп сыҡҡан ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтарҙы балаларығыҙҙың бәхете иҫәбенә хәл итмәгеҙ, эгоист булмағыҙ!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

## РИЗАИТДИН НӘСИХӘТТӘРЕ

*Хөрмәтле балалар! Эшһөйәр, изгелекле, яҡшы күңелле кешеләр һәр ваҡыт хөрмәтле була һәм яҡын күренә, быны иһә үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Ата-әсәгеҙ һеҙгә ҡарата иң ауыр һәм мәшәҡәтле хеҙмәттәрҙе башҡарған һәм һаман да үтәй. Һәр ваҡыт ҡайғығыҙҙы уртаҡлашып, бәхетегеҙ өсөн тырыша, һеҙҙең өсөн Аллаһы Тәғәләгә ялбара һәм доға ҡыла. Шуның өсөн мөмкин тиклем уларҙың хеҙмәттәренә ҡаршылыҡ күрһәтмәгеҙ, мәшәҡәттәренең хаҡын ҡайтарыу мөмкин булмаһа ла, уларға ихласлыҡ менән хеҙмәт итеүсе һәм хөрмәт күрһәтеүсе булығыҙ! Бигерәк тә Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәре улар менән матур һөйләшеүҙе васыят иткән. Рәсүлуллаһ Әкрәм әфәндебеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәләм хәҙрәттәре: "Ата-әсәләрен риза итеүсе балаларҙан Аллаһы Тәғәлә лә риза булыр", - тигән.*

## ҒӘЖӘП БИТ!

# БИШЕКТӘГЕ БАЛА БИШКӘ ТӨРЛӘНӘ...

## ә ҡарындағыһы?

**Баланы тыумаҫ борон, йәғни әсә ҡарынында саҡта уҡ тәрбиәләй башлау мөмкинме икән? Уны нимәгә өйрәтеп була һуң? Яралғы менән әсә араһында физик бәйләнештән башҡа психик бәйләнеш нисек барлыҡҡа килә? Бына ошондайыраҡ һорауҙар ғалимдарҙы күп быуаттар элек уҡ ҡыҙыҡһыныу уятҡан. Мәҫәлән, боронғо грек философы Аристотель яралғының һиҙеү-тойоу һәләте булыуы тураһында яҙып ҡалдырған. Урта быуаттарҙа ҡайһы бер Европа ғалимдары ҡарындағы баланың да башында төрлө идеялар булыуына ышанған. Был турала хәҙерге заман фәнендә булған ҡараштарҙы асыҡлап китәйек.**

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, яралғы иң тәүҙә вибрация һәм ҡағылыуҙы тоя башлап, тыуырынан ике ай алдараҡ ишетә башлай. Әммә тыштан ишетелгән тауыштың әсә организмы эсендә барлыҡҡа килгән тауыштарҙан көслөрәк тәьҫир итеүе мотлаҡ. Америка ғалимдары, һарыҡ инәлегенә микрофон ҡуйып тынлап ҡарағас, унда ишетелгән тауыштың кимәленә хайран ҡалған. Ҡарындағы бала үҙе ишетә алған тауыштарға күнегеп китә, ә билдәле бер ауаздарға хәрәкәт аша яуап ҡайтарырға өйрәнә икән. Даими ҡабатланып торған тауыштар, мәҫәлән, йөрәк тибеше уны тынысландыра ала. Тикшеренеүселәр, яңы тыуған бала әрәһенә уның әсәһенең йөрәк тибеше ритмына көйләнгән метроном ҡуйғас, бәпестең тиҙ тынысланыуына иғтибар иткән.

Яралғы тышҡы донъянан ниндәйерәк мәғлүмәт үҙләштерә ала икән? Петер Хеппер Лондонда йәшәгән буласаҡ әсәләр менән үтә ҡыҙыҡлы эксперимент үткәргән. Ғалим экспериментта ҡатнашҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы ике төркөмгә бүлгән: беренсе төркөмдәгеләр Британия телевидениеһында барған "Күршеләр" исемле "һабын операһын" көн һайын тиерлек ҡалдырмай ҡарап барһа, икенселәре был сериалды ғөмөлдә ҡарамаған була. Ошо әсәләрҙең балалары донъяға килеп, бер нисә сәғәт үтеүгә, бәпес илай башлау менән, Хеппер әлеге сериалдан алынған музыканы уйнатып ҡараған. Беренсе төркөмгә ингән әсәләрҙең бәпестәре, музыканы ишетеү менән илауҙан туҡтап, тынлай башлаһа, сериалды ҡарамаған әсәләрҙең балалары музыкаға бер нисек тә әүәрмәгән. Тимәк, әсә ҡарынында уҡ баланы музыка тыңларға өйрәтеп була, тигән һүҙ бит был.

Әгәр ҡарындағы бала нимәгәләр өйрәнә ала икән, ниңә уны "уҡытыу" ысулдарын ул үҙе тыуғансы уҡ башламаҫҡа? Калифорния штатындағы Хейворд ҡалаһының Пренаталь университетын нигеҙләүсе һәм уның президенты Рене Ван де Карр үҙен ошо юҫыҡта билдәле һөҙөмтәләргә ирешеүселәрҙең береһе, тип атай. Ул төрлө күнегеүҙәрҙән һәм уйындарҙан махсус программа төҙөп, буласаҡ ата-әсәләрҙе ошо программа буйынса тыуасаҡ баланың мейе үҫешен әүҙемләштерергә өйрәтә. Мәҫәлән, ҡарындағы бәпес ҡыбырлай башлау менән, ул ата-әсәне бала тибенгән ергә йомшаҡ ҡына итеп төрткөсләп-һуҡҡыслап, баланы һөйләшергә өйрәткәндәге шикелле, тик ағымлы һүҙҙәр менән, ҡысҡырып әйтә-әйтә, аралашырға өйрәтә. Доктор Ван де Карр раҫлауынса, уның Пренаталь университетын "тамамлаған" бәпестәр, уның программаһы буйынса шөғөлләнмәгәндәр менән сағыштырғанда, әүҙемерәк булып, тиҙерәк үҫешеп, үҙҙәренең ата-әсәләре менән яҡыныраҡ һәм хислерәк бәйләнештә була. Әле әйтелгәндәрҙе раҫлаған башҡа миҫалдар ҙа бар.

Шуға ҡарамаҫтан, балалар үҫеше буйынса белгестәрҙең күбеһе, был мауығыуға скептик ҡараштә булып, бындай һөҙөмтәләргә ышаныс белдермәй. Улар әйтеүенсә, тыуасаҡ бала менән ата-әсә араһында ни бары эмоциональ бәйләнеш булып, йыш ҡабатланып тороусы күнегеүҙәр ошо мөнәсәбәттәрҙе нығытып ҡына ебәрә. Ошоға күрә был белгестәр, Америкала ҡыйбат хаҡҡа күпләп һатыуға сығарылған ошондай электрон уҡыу әсбаптарын фән ҡаҙанышы итеп түгел, ә коммерция сығанаҡтарының береһе рәүешендә баһалай. Шул уҡ ваҡытта "Тыумаҫ борон уҡыта башлау" программалары кеүек кешеләрҙә ихлас ҡыҙыҡһыныу уятҡан тикшеренеүҙәр дауам итә, һәм беҙ был өлкәлә яңы асыштарға юлығыуыбыҙ бар.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...



# БАЛАҺЫНАН...
## баш тартҡандар ҙа бар

**Хәтеремдә, бәпесемә 20 генә көн булғанда Республика клиник балалар дауаханаһына эләктек. Дауахананың атамаһы ғына ни тора! Шуға тәү сиратта үҙемде ғәйепле тойҙом: ҡарап еткермәгәнмен, өлгөрмәгәнмен, иғтибарым етмәгән, тегеләй итмәгәнмен, былай итмәгәнмен.**

Әммә тәүге кистә үк, табиптарҙың ярҙамынан һуң, бәпесем тынысланып йоҡлап китте. Егерме төн туймаған йоҡом туйып, йонсоуым үтеп, күҙем асылғас, палаталағы башҡаларға күтәрелеп ҡараным. Ҡараным да, сәбәләнеүем өсөн башҡа әсәйҙәр алдында уңайһыҙлыҡ кисерҙем. Кендек яраһы уңалмай, эрен йыйылыу сәбәпле мөрәжәғәт иткәйнек. Палаталаш әсәйҙәрҙең кисергәне алдында тырнаҡ аҫтына шырау ҡаҙалған һымаҡ ҡына ябай ине минең проблема. Хәйер, хирургия бүлегенә ябай пациенттар эләкмәй инде. Минең күршеләремдең хәле ябайҙан түгел ине.

Әйткәнемсә, бәпес тәүге көндө үк һауыҡты, шулай ҙа ете көн тоттолар. Арыуланған бала көнө-төнө йоҡлай, мин тирә-яғымды күҙәтәм.

Бүлектә, пост ҡаршыһында бер палата бар. "Отказниктар" ята унда. Диагнозды белгәс, әсәйҙәре баш тартҡан уларҙан. Бәләкәстәргә операция яһалған, реабилитация осорон күмәге бер палатала үткәрә. Мин үткәнһүткәндә ҡарамаҫҡа тырышам ул яҡҡа. Йөрәк түҙмәҫ кеүек. Сабыйҙарҙың араһындағы берәүҙе бөтөн бүлек пациенттары барып ҡарай. "Шул тиклем матур малай!" тиҙәр минең күршеләрем дә. Персонал ул баланы бер- береһенән ҡыҙғана хатта. Күҙең тейә, тип берәүһен яҡын да ебәрмәйҙәр янына. Операциянан һуң ныҡлап һауыға башлаған икән. Шуға һөйөнә табиптар. Руслан исемле бер медбрат егет иһә үҙенең дежурствоһында ҡулынан төшөрмәй. Бәпестең башын усына һалып ала ла, хәбәр һөйләй, теге малай яуап итеп геүләгән була... Үҙем күреп торҙом, был күренештән иң уҫал һаналған медсестра ла күҙ йәштәрен һөртөп ситкә боролдо.

Ә бер көндө бүлек умарта күсе кеүек геүләп торҙо. Табиптар теге малайҙың әсәһен тапҡан. Килде. Урта йәштәрҙәге ҡатын. Һинән, минән бер нимәһе менән дә айырылмай. Палаталарҙағы ҡатындар тегеләй-былай үткән булып күреп килделәр. Хирургтар баланы күрһәтеп, оҙаҡ өгөтләне, һауыҡты балаң, инвалидлыҡты алырҙар, башҡаларҙан бер ниңмәһе менән дә айырылмаҫ, тинеләр. Юҡ, ҡарарға мөмкинлегем юҡ, тип сығып китте. Коридор тып-тын булып ҡалды. Ярты сәғәт үттеме-юҡмы, теге ҡатын кире боролдо. Әсәлек хисе еңде. Хирургтар әллә ҡайҙан матур одеял табып, малайҙы төрҙө, пакет-пакет кейем-һалым йыйып бирҙе, палаталарҙан әсәйҙәр йүгереп сығып, "памперс", һөт ҡаптары, крем һәм башҡа кәрәк-яраҡ тотторҙо. Такси саҡыртылды. Бөтөн бүлек менән оҙатып ҡалдыҡ малайҙы. Теге палаталағы биш сабыйҙың, исмаһам, берәүһе әсәйле булды бит! Бәпес һауыҡҡандыр, әсәһе лә юғалтып кире табып алған хазинаһының ҡәҙерен беләлер, тип ышанғы килә хәҙер...

**Сәлимә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ӘСӘЙ ЯҘМАЛАРЫ

# МАЛАЙҘАР ТУЛЫ ДОНЪЯМ - 2



**Ир бала үҫтергән әсәйҙәр тураһында халыҡ аҡылы нимә, ти? Эйе, уңған ҡатын ул таба, тиҙәр. Ә ҡатын-ҡыҙҙың уңғанлыҡ сиктәре ҡайҙа һуң? Аш-һыуға оҫталыҡтамы? О, улайһа, малайҙарҙың әсәһенән дә уңған кеше юҡ, белгегеҙ килһә.**

Малайҙар әсәһе булғаны бирле мин, мәҫәлән, һөтһеҙ һәм йомортҡаһыҙ ҡоймаҡ туғып өйрәндем. Ғәләмәт еңел рецепт. Улдарыңдың ҡоймаҡ ашағыһы килә, ә өйҙә һөт тә, йомортҡа ла юҡ. Әммә мин аптырап тормайым: ике сынаяҡ он, ҙур бер бокал йылымыс һыу, бер балғалаҡ ҡоро әсетке, ике ҡалаҡ шәкәр һәм бер семтем тоҙ һалып туғылым да, ярты сәғәткә әсетергә ҡуйғандан һуң, тиҙ генә майлы табала шыжлатып ҡоймаҡ бешереп алам. Сөнки беҙҙең өйҙә ҡамырҙан бешерелгән берәй ризыҡ булмаһа, малайҙарҙың тамағы туймай...

Тағы беҙҙең өйҙә Байназар ниңмәне боҙа, нимәгә тейергә ярамай, бөтәһе лә юғарыға менеп китә. Шуларҙы юғарыға йыя торғас, шкаф башында урын ҡалманы. Бер көндө урамға сығырға йыйынабыҙ. Гәҙәттәгесә, Байназар курткаһының бер еңен кейә лә, ситкә ҡаса, йә быуынһыҙланып, иҙәнгә һуҙылып төшә. Баязит менән Бәхтейәр артымдан эйәреп йөрөй: курткам ҡайҙа ла, салбарым ҡайҙа. Йән асыуы менән шкафты асам, кейемдәрегеҙҙең ҡайҙа ятҡанын белмәйһегеҙме тип ҡысҡырмаҡ булам, әммә өлгөрмәйем. Шкаф башынан бер тимер һауыт дыңҡ иттереп ҡыры менән генә күҙ төбөнә килеп төшә. Күҙҙән субырлап йәштәр аға башлай. Малайҙарым үҙҙәре тыйыла алмай көләләр, үҙҙәре мине йәлләй, минең тағы ла ныҡлараҡ йән көйә. Һыуыҡтыстан ҡулыма нимә эләгә, шуны алып күҙ төбөнә терәйем, һынар ҡулым менән шымып ҡалған Байназарҙы кейендерәм (Нимә тип һаман тышҡа сығам, тип маташам икән?). Был юлы уны үҙемдән алда соланға сығарып ебәрмәйем, аҡылға ултыртҡан инде малай. Бер саҡ шулай алдан сығарып ебәргәйнем, мин кейенеп сыҡҡансы, соландағы ондо кинәнеп борҡоткан. Хәҙер ишек төбөндә көтә. Мыжый. Ашыҡ-бошоҡ кейем эләктереп сығып китәм. Тышта ла ҡулыма нимә эләгә, шуны күҙ төбөмә терәйем. Ярай әле, күгәреп сыҡманы.

Әммә малайҙар артынан сабыулап, арманһыҙ булып ҡайтып ҡайтып инәм дә, тағы бешеренергә тотонам. Тағы ҡамыр аштарына тотонам. Йә печенье бешерәм, йә бәлеш. Ҡамыр күреп ҡалған Байназар шунда уҡ еңдәрен төрә-төрә "Ҡамыр менән уйнайым" тип, өҫтәл янына йүгереп килеп етә. Өлгөрмәйерәк ҡалһаң, үҙенә айырым уҡлау менән таҡта тотторһаң инде. Өлгөргәндәрҙе лә ҡалышмай, ҡасан бешә, мин дә бәлеш эшләшәм, тип эргәмдән китмәйҙәр. Ашарға бешергәндә саҡ үҙҙәренә эләгеп кенә йығылмайым инде. Кискелеккә бешеренгәндә лә Байназар аяҡ араһында бутала. Асыҡҡан, мыжый. Аяғымды ҡосаҡлап, өҫтәл янынан этеп илаған бәләкәсте янына өҫтәлгә мендереп ултыртам. Минең ҡарабойҙай таҙартҡанды ҡарап, әҙерәк шымып ултыра ла, һәр саҡ эргәмдә ятҡан блокнот эсендәге ручканы тотоп алып төшөп китә. Кишер менән һуғанды тиҙ генә турап, тауыҡ ите менән ҡыҙҙырырға ҡуйғансы әүрәп йөрөй шунда. Инде ҡарабойҙай алайым тип шкафҡа боролһам, улымдың кинәнеп китеп баяғы ручка менән һүрәт төшөргәнен күреп ҡалам. Стенаға. Ишектән ингәс тә күренеп кенә тора! Мин ах та ух килеп стена эргәһендә торғансы, малайғынам иҙәндә ултырып ҡалған банка эсенән ярманы алып, иҙәнгә һибеп ебәрә. Сүпләп алып, ҡат-ҡат йыуып, ҡарабойҙайымды бешерергә ҡуйғансы, бая үҙем өйрәткән ысул менән өҫтәлгә менеп тә етә, ыңғайына һыулы стакан иҙәнгә төшөп, меңәрләгән ярсыҡтарға селпәрәмә килә...

Кистәрен ғаилә табынына күмәкләп йыйылып ултырырға кәрәк, ти психологтар. Ыһы. Әй тулы малайҙарыңдың һәр береһен айырым-айырым өҫтәл янына йыйып, тик кенә ултыртып ашатып ҡарағыҙ әле! Арманһыҙ ғына булырһығыҙ. Әлбиттә, был бурысты үтәү бик ауыр булһа ла, киске ашты бишәүләп бергә ултырып ашау - минең иң төп талап. Шул талапты үтәгәндә лә, кисен аш бүлмәһендә ул-был эш менән булышып йөрөгән сағымда уларымдың һәр береһе айырым-айырым янымда инеп сыға: икмәкҡә май һөртөп бир әле, тағы берҙе генә сәй эскем килә, һыу эсәм... Ингән берәүһе янымда ултырып, хәбәрен һөйләп сығып китә - әсәй менән икәүҙән-икәү генә һөйләшеп алырға кәрәк һәр береһенә, шуға тыймайым...

Көн дә ҡоймаҡ, йә бәлеш, йә тәмле-татлы печенье ашап ҡына ултырғас, мискә һымаҡ булып китмәҫ өсөн малайҙар әсәһенең махсус диетаһы бар. Һеҙгә лә "дөрөҫ туҡланыу" серҙәремде өйрәтәйемме? Берҙән, төрләндереп, күп итеп бешеренергә өйрәнегеҙ. Ҡамыр аштарын бигерәк тә. Билемә зыян була тип ҡурҡмағыҙ, һеҙгә барыбер бер нәмә лә эләкмәй ул. Эләкһә, шул бәлеш ҡатыһын, печенье ҡалдығын кимерерһегеҙ. Бисквит тигәне тураһында хыялланмағыҙ ҙа, сөнки табанан төшөү менән ул юҡ була. Икенсенән, бутҡаны күп итеп бешереп ҡуйығыҙ. Күпме бешерһәгеҙ ҙә, һеҙгә етмәй ҡала барыбер. Өсөнсөнән, порцияларҙы үҙегеҙҙең тәрилкәгә икеләтә һалығыҙ. Сөнки бәләкәсегеҙ, иркәләнеп, барыбер һеҙҙең ҡалаҡ менән, һеҙҙең тәрилкәнән ашаясаҡ. Мин дә Байназарға бутҡа ҡаптырам да, ҡалағымды ялап ҡына ҡуям. Һеҙ ҙә шулай итегеҙ, тамаҡ тиҙ генә туя ла ҡуя ул. Дүртенсенән, ғөмүмән, ниндәй ашау ти! Малайҙарығыҙ тамаҡтары туйып, өҫтәл артынан төшөп киткәнсе аяҡ өҫтө тораһығыҙ бит. Бишенсенән... Алтынсынан... Ҡыҫҡаһы, ошо кәңәштәрҙе тотһағыҙ, 90х60х90 стандартына тап килерһегеҙ, тип вәғәҙә бирмәйем. Бары студент саҡта, ялҡытты, тип һалып ҡуйған кейемдәрегеҙ таптаман булыр. Ә! Кәүҙәне тулыһынса сағылдырған көҙгөгәҙ булмаһын өйҙә. Юҡһа, баяғы студент саҡта кейгән кейемдәр... шапайған, шуға яраған икәнен аңларһығыҙ. Үәт!

Уңған ҡатын ул таба, тигәндәй. Малайҙар әсәһе булғас та, артыҡ егәрләләнеп китмәгеҙ инде. Малайҙарға арып йонсоп, эләгәтәгәрәй саҡ йөрөгән шаҡлә түгел, һау-сәләмәт бөхетле әсәй кәрәк. Мәкәлдең икенсе яртыһы нисек, беләһегеҙме? Изге ҡатын ҡыҙ таба. Ниндәй генә егәрле булмаһын, малайҙар әсәһе был кимәлгә етмәй, ти. Шуға ла "уңған" һүҙенә бай һәм яғымлы башҡорт теле тағы мәғәнә биргәнен онотмағыҙ. Һәр берегеҙгә ысын мәғәнәһендә улдарынан уңған әсәй булырға яҙһын!..

**Гөлсимә ИШТАНОВА.**

**✓ Мөхәмәтша Буранғолов башҡорт шағиры һәм драматургы, фольклорсы ғына түгел. Ул 1917-1920 йылдарҙа Туҡсоран кантонының халыҡ мәғарифы бүлеге етәксеһе һәм кантон башҡарма комитеты рәйесе була.**






...Көҙгө урман юлынан ҡашыҡмай ғына пар ат егелгән ылау килә. Төк-төк әйберҙәр тейәлгән оҙон арбаның алғы өлөшөндә, йөккә арҡаларын терәп һыйынышып, өс кеше ултыра. Ҙур кәүҙәле ирҙең бер яҡ яурыны уралған, дилбегәне аяҡтары өҫтөндә һалып, аттарын үҙ иркенә ҡуйған да, һау ҡулы менән итәгендә балаһын тотҡан ҡатынын ҡосаҡлаған. Ҡатыны теле асылып тәтелдәй башлаған малайын һөйләштерә:

- Атай, тиген. А-атай! Был - атай.

- Ат-тау!

- Мин кем? Мостафа - мин?

- Әҙ-зәү! - сабый белгән һүҙҙәренең барыһын да әйтеп ҡалырға тырыша.

- Ат! Ат! Тллл-тллл!

Йылмайып тыңлап килгән атай ҙа һүҙгә ҡушыла:

- Бисура, улым, би-су-ра-а.

Рәхәтләнеп көлә Көнбикә:

- Бисура юҡ хәҙер, юғалды, бынын арьяғына Айыухандың ҡатыны ғына бар.

Айыухан да көлә:

- Ҡуй, юғалмаһын, мин бит тап ана шул бисураны һөйәм.

Бәхеттәре бер арбаға һыйған әҙәмдәрҙе пар аттар алға, офоҡтар арьяғына алып китте. Әле һанһыҙ яуҙар, һанһыҙ яныуҙар кисерәсәк был ерҙә ниндәй яҙмыш көтәлер уларҙы - билгеһеҙ.

**(Аҙағы).**

*АФАРИН!*

# МӨХӘМӘТША БУРАНҒОЛОВТЫҢ...

## халҡыбыҙға мираҫы баһалап бөткөһөҙ

**Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры сираттағы ижад миҙгелен Мөхәмәтша Буранғолов пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ашҡаҙар" музыкаль драмаһы менән асты. Яңы сәхнә әҫәре республиканың һәм башҡорт театрының 100 йыллығына, яҙыусы, драматург һәм фольклорсы Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 130 йыл тулыуға бағышлана. Спектаклдең режиссеры Зиннур СӨЛӘЙМӘНОВ менән ошо спектакль тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**▸ М. Буранғоловтың "Ашҡаҙар" пьесаһының башҡорт театры тыуған урынға - Стәрлетамаҡ ерлегенә әйләнеп ҡайтыуына режиссер булараҡ һеҙ ниндәй мәғәнә һалаһығыҙ?**

- Башҡорт театры, ысынлап та, Стәрлетамаҡта барлыҡҡа килә һәм уның сәхнәләштергән тәүге спектаклдәренең береһе "Ашҡаҙар" була. Был пьесаны театрҙа ҡуйылған һәм ниндәйҙер кимәлдә тамашасы һөйөүен яулаған беренсе башҡорт пьесаһы тиһәк тә яңылыш булмаҫ, моғайын.



Әлбиттә, башҡорт телендә башҡа пьесалар ҙа яҙылған, 1919 йылда "Аҡшан батыр" спектакленең премьераһы була. Әммә "Ашҡаҙар"ҙың үҙенең тарихы бар. Ырымбурҙа ул 1917 йылда уҡ ҡуйыла башлай, төрлө уҡыу йорттарында ҡуялар уны. Сәғит Агиш та үҙенең иҫтәлектәрендә беренсе тапҡыр башҡорт мөхите тураһында башҡортса спектаклдәр уйнала башлауы тураһында яҙып ҡалдыра. Әлбиттә, әле саҡ драматургия барлыҡҡа килеп торған осорҙа тыуған пьеса булараҡ, ул артыҡ ябай. Тик үҙ заманында күп ҡуйылып, режиссерҙар тарафынан эшләнеп, бер формаға әүерелгән әҫәр ул. Уның бер варианты ғына Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала һаҡланып ҡалған. Варианттары булған, аңлатмаларында ла был турала телгә алына. Уның хатта операһы була, Эйхенвальд яҙа уны. Премьераһы 1940 йылдың декабрендә була. Либреттоһын Мөхәмәтша Буранғолов үҙе яҙа.

Мөхәмәтша Буранғоловҡа килгәндә, уның халҡыбыҙға мираҫын баһалап бөтөрлөк түгел. Халҡыбыҙҙың тарихын байҡап, тарихи шәхестәребеҙҙе иҫкә төшөрөп, уларҙы сәхнә аша күрһәтке килгәйне. Сөнки театр - ул күңел асыу урыны һәм уның маҡсаты тамашасыны көлдөрөү-илатыу ғына түгел, ул кешене уйландырырға ла, мәғлүмәт бирергә лә тейеш.

**▸ Жанры музыкаль драма тип билдәләнеп, спектакль "Ашҡаҙар" тип аталһа ла, унда Мөхәмәтша Буранғоловтың тормошона һәм ижадына бәйле линия булыуын да әйтергә кәрәктер тамашасыға...**

- Мөхәмәтша Буранғолов башҡорт шағиры һәм драматургы, фольклорсы ғына түгел. Ул 1917-1920 йылдарҙа Туҡсоран кантонының халыҡ мәғарифы бүлеге етәксеһе һәм кантон башҡарма комитеты рәйесе була. Шуға уның образын төрлө яҡлап асырға теләнек. 1919 йылдың декабрендә спектаклдең премьераһы була, 2020 йылдың ғинуарында Башревком рәйесе Харис Йомаголов Мәскәүгә саҡырыла. Ошо ваҡиғала Буранғоловтың ҡатнашлығы бар тип иҫәпләнә, сөнки БашЧК ағзаһы Карл Муценек Туҡсоран кантонына килә һәм Вәлиди һәм башҡорт хөкүмәте башында торған ҡайһы бер кешеләрҙе юҡ итеү маҡсаты менән йөрөүе хаҡында һүҙ ысҡындыра. Буранғолов Стәрлетамаҡҡа барып, был турала Йомаголовҡа еткерә. Дөрөҫөн әйткәндә, ошо мәлдән милләтебеҙгә ҡара көндәр килә. Йәғни, милли хәрәкәттең киләһе этабына ошо ваҡиғанан алып ярты йыл ҡала, 1920 йылдың йәйендә Башревком урынына Башҡорт республикаһының Үҙәк Башҡарма комитеты барлыҡҡа килә. Ошо фактарҙы ла алып, реаль документтар, 1950 йылда Буранғолов сираттағы тапҡыр ҡулға алынғас үткәрелгән допростарға, ғалимдарыбыҙҙың ғилми эштәренә таянып яҙылды был линия. Был эште Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Саламатова башҡарҙы.


**(Дауамы 16-сы биттә).**


*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Артыҡ кеше

Бер яһил, эсеп алһа, ҡатынын, балаларын йәберләй торғайны, унан ҡалһа, ишек алдындағы мал-тыуарын тукмай. Ярһыуына сыҙаша алмай, атына атланып ала ла, бахыр малды сыбыртҡы менән яра-яра урам буйлап сабырға тотона. Һуйған да ҡаплаған йәлләд, иманһыҙ, ҡанһыҙ башкиҫәр! Бер тапҡыр баҫып яткан ҡаҙының йоморҡҡаларын сәсрәтә һуғып бөттө, шунан инәлектең башын түмәргә һалып өҙә сапты. Телендә гел мәғәнәһеҙ хәбәр: "Алла юҡ ул, булмаған, йәнең теләгәндә ҡылырға мөмкин!.." Шулай туҙынып, доньяға һыймай йөшәп ятҡанда аяҙ көндө йәшен атҡандай фалиж һуҡты быны, ҡул-аяғы йөрөмәҫ булды, ул ғына ла түгел, хәрәкәт ағзалары күҙ алдында кибә башланы...

Һуңғы көндәрендә янына инеп хәл белешеүсе лә табылманы, тукмалған ҡатынынан, йәберһетелгән балаларынан башҡа... Медицина хеҙмәткәре булараҡ, ярҙам күрһәтмәйенсә хәлем юҡ, сөнки сырхауҙар барыһы ла бер хөкөмдә, хоҡуҡтары тигеҙ. Барып ингәнемдә ул хәл өҫтөндә ята ине. Мине абайлағас, ғырылдап өндәште: "Алла бар ул... Булмаһа, гонаһ ҡылған ҡулдарымды ҡыу ағасҡа ҡалдырмаҫ ине... Хәҙер үлергә ризамын, тик әҙәмсә йән дә бирә алмайым. Күрәһең бит, Тәңре мине, иблесте, теге доньялағы тамуҡҡа булһа ла ҡабул итергә теләмәй ыҙалата. Мин был доньяла ла, теге доньялала ла артыҡ кеше..."

### Үкенеү

Хәҙер ҡайҙа баш тыҡма, ҡағыҙ таптыралар. Алдынды, артынды ҡапларлыҡ ҡыштырҙағың булмаһа, кеше түгелһен, һине һанламайҙар ҙа, һөйләшмәйҙәр ҙә, ҡабул да итмәйҙәр. Бюрократияның иң юғары нөктәһе ул макулатура туплау. Өйһәләр, тағы ни асыу - партфолио тип аталған шул нәмәнең кирбестәй ҡалын һәм һәлмәк булыуы мотлаҡ. Ярай, ҡалын, һәлмәк тә булһын икән, ти, иң йәнгә тейгәне - ул досьеның кәрәге лә, хәжәте лә һуҡыр тинлек, килтергәнеңде иғтибар менән уҡып, тикшереп ултырыусыһын тапмаҫһың. Тикшереүселәрен дә әйтер инем инде...

Бынан бер нисә йыл элек минән ҡылыҡһырлама талап иттеләр. Кисекмәҫтән. "Беҙҙең директор командировкала бит әле, һеңлем, ул аҙна аҙағында ғына ҡайта, - тинем, - теге юҡ нәмәне таптырған секретарға. - Кадрҙар бүлегендәге белгес тә больничныйҙа. Бәлки, бер аҙ көтөрһөгөҙ?"

"Документы мне нужны завтра, утром! - Талап ҡырҡыу ишетелде. - Делопроизводитель ауырый икән, үҙегеҙгә үҙегеҙ яҙығыҙ. - Косметик буяҡтарҙан ғына хасил ҡыҙ яһалма керпектәрен осло һөңгөләй итеп минең тарафҡа йүнәлтте. - Бөтәһе лә шулай эшләй!"

"Тукта, ҡылайым мин һиңә ҡылыҡты, бер юлы һинең, тәтәйбикәнең дә белем кимәлен тикшереп ҡарармын!" тип эстән тантана итеп ҡайтып киттем. Фантазиямды егеп, шәп ҡылыҡһырлама яҙҙым үҙемә, шөхесемде маҡтаным, күктәргә ашырҙым, хәрби бурыстарымды үтәгән тапҡырға былай тип тә өҫтәнем: "Служил в пограничных войсках, старшина запаса, награжден знаками "Отличник Советской Армии", "Отличник погранвойск 2 степени", занесен в Книгу Почета части". Һәм тарихи юлдарҙы өҫтәнем: "Он участник знаменитой Куликовской битвы... "

Секретарь ҡыҙ теге оҙон керпектәре менән тексты үтәләй сәнсеп, яҙғандарымды диҡҡәт менән уҡып сыкты ла, ҡағыҙ битен буялған осло тырнаҡтары осона элеп, белекле ҡиәфәттә дөйөм документтар араһына һалып ҡуйҙы...

Һуңынан үкенеүемдең сиге булманы! Нишләп кенә Полтава алышында ҡатнашты, изге апостол Андрей Первозванный ордены менән дә бүләкләндем тип яҙмаҫҡа, өҫтәмәскә ине миңә? Үтә ине бит!

✓ Ырымбур яғынан килгән был ижади төркөм сәхнәне тултырып йырлай ҙа йырлай, хисләнгән тамашасылар менән баһамандар тын ҡалған. Был тынлыҡ юҡҡа булмаған: был төркөм "аманат йырҙар" башҡарған.



ИНТЕРНЕТТАН



# ВИТАМИНДАР ХАҠЫНДА

■ Данди университеты билдәләүенсә, яман шеш осрағында генетик мутацияларҙы ғәйепләүҙән файҙа юҡ. Бында иммун системаһы үҙенсәлеге мөһим. Мәҫәлән, онкология үҫешенең иң төп факторы булып иҫәпләнгән генетик мутациялар ни өсөн ир-егеттәрҙең яман шеш менән йышыраҡ ауырыуын аңлата алмай. Иммун системаһы быға асыҡлыҡ индерә ала. Бәхтиһәң, ир-егеттәрҙең иммун системаһы ҡартайыуға ҡаршы насар көрәшә. Ә был осраҡта яман шеш хәүефе арта. Бындай һығымтаға ғалимдар яман шеш менән ауырыған 18-70 йәштәге 2 млн кешенең мәғлүмәттәрен өйрәнгәндән һуң килгән. Иммун системаһы ҡартайыуының төп сәбәбе - боғаҡ биҙенең кибеүе. Һаҡлаусы Т-күҙәнәктәр ошо биҙҙә барлыҡҡа килә. Күҙәтеүҙәр буйынса, был биҙҙең үлсәме 16 йыл һайын ике тапҡырға кәмей. Был иһә Т-күҙәнәктәрҙең кәмеүенә һәм яман шеш хәүефе артыуына килтерә.

■ Даһи кешеләр һәр ваҡыт хис-тойғоларын күрһәтеп бара, тип иҫәпләй белгестәр. Шәхесте характерлаусы 5 сифат араһында хәҙер ошо төшөнсә лә бар. Ҡалған сифаттар - асыҡлыҡ, намыҫлылыҡ, экстраверсия, йәғни, кешенең тышҡы донъяға асыҡ булыуы, башҡаларға юл биреү һәләтенең гениаллеккә бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, ә хис-тойғолар ташып тороу менән гениаллек бер-береһе менән бәйле. Бындай кешеләрҙең тормошо еңелдән түгел, ти ғалимдар, улар көн һайын тотош хистәр ҡойоно: кәрәгенән артыҡ һөйөү, ҡурҡыу, өмөтһөҙлөк, көнләшеү тойғолары кисерә. Уларҙың был ҡылығы кешенең бай хыялдары һәм баш мейеһен үҙенә буйһондора алмауы менән бәйле. Ғалимдар был "хәүефле кнопканы" тапҡан, ул ҡурҡыу һәм хәүеф реакцияларын ғына түгел, ә ижади дәрт өсөн дә яуап бирә.

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үҫмерҙәргә D витаминын ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто ла яһамай, диабет хәүефен дә түбәнәйтмәй. Етмәһә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үҫмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины дифициты һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үҫмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", ти ғалимдар.

■ С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәҫәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙа күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МОҢЛО ЛА ҺУҢ БАШҠОРТ ДОҒАҺЫ!



Төп еңеүсе - Флүзә Хәлитова.

**Сибай ҡалаһында быйыл төбәкара мөнәжәтселәр конкурсы 6-сы мәртәбә ойошторолдо. "Мөнәжәткә барабыҙ", тиешеп, эстән генә әҫәрләнеп, тыштан илһамланып, ике йөҙҙән ашыу кеше көҙгө ҡояш менән ярышып, Ирәндек тауын артылды. Ҡаланың Чайковский урамындағы Балалар ижады йорто алдында иртәнге таң беленгәндә үк тәүге бәйгеселәр килеп туҡтаны. Төрлө яҡтан килде улар - Әбйәлил, Йылайыр, Хәйбулла, Белорет, Ейәнсура, Силәбе өлкәһе, Ырымбур яғы...**

Ырымбур яғы тигәс, асыҡлап әйтеп китәйек. Ырымбур өлкәһенең Туҡ һәм Соран йылғалары буйында бик күп боронғо башҡорт ауылдары барлығын беләбеҙ. Улар йомран-табын, меңле, бөрйән, ҡыпсаҡ ырыуҙарының ауыл-ауыл булып ултырған ҡәүемдәре. Был төбәк халҡы башҡорт теленең көньяҡ диалектына ҡараған туҡ-соран һөйләшендә әле лә аралаша. Башҡорт теле үҙенсәлектәре, йыр сәнғәте өлгөләре, әкиәтселәр мираҫы, ҡобайырсылар һәм суфый шағирҙар ижады ауыҙ-тел хазинаһы төбөндә ята. Новосергиевка районынан килгән "Мираҫ" төркөмө башҡарған йырҙың һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ: башҡорт халыҡ оҙон көй мираҫының бер үрнәге. Бына ул тотош романдарға һыймалы тарихты ҡосаҡлаған ғәзиз башҡорт йыры:

*Беҙҙең ауылыбыҙҙа бер мәсет бар.*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Манараһы мәрмәрле,*
*Төбө таш.*
*Һеҙ, дуҫтар, әйтегеҙ, күңелем шат.*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Күңелем шат булһа ла,*
*Күҙем йәш...*
*Ялтыр ҙа ғына ялтыр ни ялтырай?*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Лавкаларға һалғандар*
*Еҙ йоҙаҡ...*
*Йөрөгән егеттәргә йыл тиҙ уҙа.*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Көткән буй ҡыҙҙарға ла*
*Бик оҙаҡ.*
*Елфер ҙә генә елфер ней елферҙәй?*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Матур буй ҡыҙҙарҙың да*
*Һөлгөһө.*
*Беҙ генә китәбеҙ сәфәрҙәргә.*
*Әйләнеп аҡҡан уҡ ағым һыу...*
*Эй!.. Юҡ та ҡайтыуҙарҙың да*
*Билгеһе.*

Был йырҙың исемен "Мәсет йыры" тиҙәр. Күпме өмөт һәм мөхәббәт һаҡлаған әҙәм йөрәге - үҙе бер илаһи "мәсет" түгелме? "Мираҫ" төркөмөнөң йәнә бер сығышы "Нәсихәт һәм Салауат" тип аталды.

*Бисмилланы күп әйтегеҙ -*
*бик күп һауабы уның,*
*Лә иллаһы иллалаһ,*
*тип өҫтәп әйтегеҙ тағын.*
*Гонаһһыҙ әҙәмдәр юҡтыр,*
*тәүбә итергә кәрәк;*
*Ҡайғы-хәсрәтле саҡтарҙа*
*сабыр итергә кәрәк.*
*Ата-әсәнең хаҡы бик ҙур -*
*ҡәҙеренә етегеҙ;*
*Мохтаж булған бәндәләргә*
*хәйер биреп үтегеҙ.*

*Ҡарғамағыҙ балағыҙҙы -*
*төшә уға ҡарғышың,*
*Ҡарғышҡа батҡан баланың*
*ауыр була яҙмышы.*
*Намаҙ уҡый белмәһәгеҙ -*
*өйрәнегеҙ уҡырға;*
*Рамазан айы -*
*ураҙа тырышығыҙ тоторға.*
*Ҡәрҙәшегеҙ вафат булһа,*
*ясин уҡып ерләгеҙ,*
*Аллаһ ризалығы өсөн*
*саҙаҡалар бирегеҙ.*
*Атай-инәй, ҡәрҙәштәрҙе*
*һис ҡасан рәнйетмәгеҙ,*
*Рәнйетһәгеҙ, балағыҙҙан*
*миһырбанлыҡ көтмәгеҙ.*

Ырымбур яғынан килгән был ижади төркөм сәхнәне тултырып йырлай ҙа йырлай, хисләнгән тамашасылар менән баһамандар тын ҡалған. Был тынлыҡ юҡҡа булмаған: был төркөм "аманат йырҙар" башҡарған. Уларҙы яҙып ҡалдырыусы ғәжәйеп бер кеше хаҡында ла һөйләп үттеләр: хажға барып, өлкәлә тәүге хажиәләрҙың береһе булып йәшәү ҡыуанысын кешеләргә һөйөнсөләп йәшәгән Зианчура районының Яңы Ҡарғалы ауылынан Гөлфәриҙә Абдулваһап ҡыҙы Әбүбәкерова була ул.

Сибайға килгән йәнә бер "Ырымбур төркөмө" - Красногвардейский районы иҫке Юлдаш ауылынан "Юлдаш" фольклор коллективы. Улар Башҡортостанда " Уйын", "Ашҡаҙар таңдары" кеүек бөтөн республика халыҡ байрамдарында ҡатнашҡан ярайһы тәжрибәле йырсылар. Етәкселәре Эльза Йәғәфәрова йыр яратҡан ауылдаштарын әйҙәләп, сәхнә түренән төшөрмәй, өлкәлә уҙған мәҙәни сараларҙа ла әүҙем йөрөйҙәр юлдаштар. Мөнәжәтселәр бәйгеһенә бик тырышып, ентекләп әҙерләнгән һымаҡ булғайнылар, ләкин бында ғәжәп матур тауышлы, фәһемле сығыштарҙы күреп-тыңлап бер аҙ ҡаушап төштөләр. Ярай әле башлап йырлаусы, көмөш тауышы менән теләһә кемде арбарлыҡ Гөлназ Гәрәева үҙенең яратып йырлап йөрөгән "Муса, ниндәй ғәмәлең бар?" мөнәжәтен башлап ебәрҙе. Төркөм дәррәү мондо күтәреп алды... Мәҙрәсәлә дини дәрестәр биргән яҡташтары Дилә апай Буранғолова өйрәткән был әҫәр "нәсихәт" тип тә йөрөтөлә. Әммә уның жанрын жюри мөнәжәт тип билдәләне, һәм ошо башҡарыу өсөн юлдаштар беренсе дәрәжә диплом менән бүләкләнде.

Ейәнсура районының Ибрай ауылы һуңғы йылдарҙа ил күҙенән төшмәй. Иншаллаһ, һәйбәт сәбәптәр менән был төбәк танылғандан-таныла бара. Ибрай ауыл мәҙәниәт йортонда "Һүрәм" халыҡ фольклор төркөмө етәксеһе Асия Мырҙабаева менән Тәнзилә Үләкәновалар икәүһе бергә бөгөнгө заман нәсихәтен тәҡдим итте. Уларҙың сығышы ябай һәм асыҡ булып хәтерҙә уйылды, сөнки бөгөнгө заман һулышы, телдә тирбәлгән таныш һүҙҙәр тигеҙ, күңелгә һыйышлы әсәйҙәр тауышы менән әйтелде. Шулай итеп нәсихәттәр әйтеү буйынса "Һүрәм" төркөмө беренсе урынды яуланы. Бына ул "Һүрәм" нәсихәте:

*Бисмилла, тип башлайым*
*һәр көнөмдө,*

*Алға ҡуям намыҫ менән иманымды,*
*Алтын-көмөш яуған ерҙән*
*артыҡ күрәм*
*Кендек ҡаным тамған*
*ғәзиз тейәгемдә.*
*"Телһеҙ халыҡ - көнһеҙ халыҡ"*
*тип әйтәләр,*
*Телһеҙ халыҡ ер йөҙөндә*
*йәшәй алмай;*
*Ерһеҙ халыҡ далалағы ҡамғаҡ кеүек,*
*Ерен һатҡан ер йөҙөндә*
*йәшәй алмаҫ.*
*Аманатҡа хыянатты уйламайса,*
*Кемдер байый телен һәм дә*
*ерен һатып!*
*Ә бит уның ере-теле өсөн*
*күпме батыр*
*Дау ҡуптарған, яу ҡайтарған,*
*ятып ҡалған!*
*Ғибрәт, тимен яманлыҡты*
*ҡылғандарға,*
*Шөкөр, тимен яҡшылыҡтың*
*булғанына,*
*Килер быуын көсөн һалһын һәм*
*ышанһын*
*Һәммә эштең үҙебеҙҙән торғанына.*
*Эй, балалар, мин әйтәмен,*
*һеҙ тыңлағыҙ.*
*Мин әйткәндәр күңелегеҙҙә*
*урын алһын:*
*Илде, телде һаҡлау -*
*беҙҙең оло бурыс,*
*Киләсәккә беҙҙән теүәл*
*тороп ҡалһын.*

Учалы районы Сораман ауылынан Зөбәйҙә Ҡәләмова ижады йыш ҡына осрай, әүҙем эшләгән уйлы кешеләрҙең береһе ул. "Ағинәй мөнәжәте" тип исемләнгән әҫәр беренсе дәрәжә дипломға лайыҡ булды. Иғтибарлап һүҙҙәренә ҡолаҡ һалһаң, унда һәр кемдең күңелендә тирбәлгән уй-тойғолар бар:

*Мөнәжәт - ул көйләп кенә*
*Аллаға ныҡыныуым,*
*Хәйерле ғүмерҙәр һорап*
*Үҙенә ялбарыуым.*
*Аллаһ ризалығы өсөн*
*ҡылған ғәмәлдәребеҙ,*
*Ҡабул ғына булһын инде*
*ихлас доғаларыбыҙ.*
*Һигеҙ ожмах асҡысын үрелеп*
*асһаҡ ине,*
*Һеҙҙең менән бергә-бергә*
*йәннәттәрҙә ҡалһаҡ ине.*

Сүрәләр уҡыу буйынса Йылайырҙан Айыткъолованың тыңлап туйғыһыҙ сағыу һәм моңло тауышы ҡолаҡ төбөндә яңғырап ҡалды. "Ғәйбәтсе" сүрәһен уҡыны ул. Әллә йырланы, әллә иланы... Ҡорһандәге бәндәләрҙе уйлатыр, илатыр һүҙҙәрҙе еткереүсе Фатима Айытҡоловаға мең рәхмәт уҡыныҡ. Әбйәлилдән Зөһрә Бәшәрованың, Ташбулаттан "Гөлнәзирә" фольклор төркөмөнөң, Белорет районы Рысаҡай ауылынан Вәсилә Дәүләтбаеваның, "Ҡоҙасалар" фольклор төркөмөнөң, ғөмүмән, һәр сығыш хәтерҙә ҡалды, йөрәкте елкетте, уйландырҙы. Сығыш яһаусыларҙың барыһы тураһында ла мин киләсәктә аныҡлабыраҡ һүҙ әйтәсәкмен әле.

Ырымбур өлкәһе Новосергиевка районы Әхмәр ауылында йәшәүсе Флүзә Әмир ҡыҙы Хәлитова үҙ төбәгендә киң билдәле һәүәҫкәр көйсө-композитор һәм илһамлы йырсы, оҫта башҡарыусы. Ул Сибайҙа үткән был мөнәжәт фестиваленә бөтә ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәп, яҡшы әҙерләнгән булып сыҡты. Мөнәжәт әйтеү буйынса ул үҙ ауылында уҙған быуатта уҡ ижад ителгән һәм бөгөн яңыртылған ауыҙ-тел ижады өлгөһөн алған. "Октябрь революцияһынан һуң дин тыйылған ваҡытта барлыҡҡа килгән мөнәжәт был", тип иғлан итә ул һәм саф моңло тауыш менән йырлап бирә:

*Үтеп бара йәшлек - белмәй ҡалдым,*
*Ҡартлыҡ етеп килә,*
*һиҙмәй ҡалдым;*
*Ғәмәлем юҡ, хәлем ауыр,*
*раббым Аллам,*
*Нисек итеп хозурыңа барам инде?*
*Үкенәмен донъяларҙа йәшәгәндә*
*Намаҙ ҡуйып,*
*руза тотмай йөрөгәнемә,*
*Ғәмәлем юҡ, хәлем ауыр,*
*раббым Аллам,*
*Ни хәл итеп хозурыңа барам инде?*
*Ғибәҙәттәр ҡылалманым*
*хаҡ мәүләмә,*
*Ярҙам ҡулын һуҙалманым*
*мохтаждарға,*
*Йәтимдәрҙең хәлләрене*
*белалманым,*
*Шәфәғәт бир, шәфәғәт бир,*
*рәсүлаллам!*
*Намаҙ ҡуйып,*
*руза тотмай йөрөгәннәргә,*
*Ҡаты ғазап булыр,*
*тиген хәҙисләрҙә...*
*Ғәмәлем юҡ, хәлем ауыр,*
*раббым Аллам,*
*Ни хәл итеп хозурыңа барам инде?..*

Артабан Флүзә Әмир ҡыҙы бәйгенең икенсе шартына тура килгән нәсихәткә күсә. Ырымбур яғында йәшәгән, дидактик шиғырҙары, өгөт-нәсихәткә бай ижады менән башҡорттоң 20-се быуат суфый шағирҙары рәтендә торған Ғүмәр Ғайсинды халыҡ яҡшы белгән. Уны яҡташтары Аҡһаҡ кейек сәсән тип йөрөткән. Зәғифлегенән аҡһауы, илйорт ҡыҙырып кейек кеүек тын яңыртып йәшәүе, йор телле сәсән даны алыуы уның был ҡушамат исемендә сағыла. Ысынлап та, егерменсе быуат осонда йәшәгән Аҡһаҡ кейек сәсәндең һүҙҙәре бөгөн дә сәпкә тейә, күнелгә ягыла, аҡылды арбай.

*Һеҙ - аҫаба башҡорттар бит,*
*һеҙ - бында төп, баш йорттар бит.*
*Шуны онотоп ҡуймайыҡ,*
*Онотторop тормайыҡ,*
*Асыҡ ауыҙ булмайыҡ!*
*Аң булығыҙ, балалар!*
*Үкенескә ҡалырҙай*
*Ҡаҡ булмайыҡ, балалар.*
*Башҡорт торған ил өсөн,*
*Башҡорт торған ер өсөн,*
*Башҡорт тотҡан дин өсөн,*
*Башҡорт алған тел өсөн,*
*Башҡорт тигән көн өсөн*
*Таң булайыҡ, балалар!*
*Башҡа милләтте лә ҡаҡмай,*
*Һәр бәндәгә рәхим белгән,*
*Һәр кешегә сәләм бирגән,*
*Тау булайыҡ, балалар!*

Флүзә Әмир ҡыҙы конкурста өсөнсө турҙы - Мәүлит Ямалетдин тәржемәһендә "Фатиха" сүрәһен көйләп һөйләп ишеттерҙе. Уның яғымлы тауышы, сығышы йыйнаҡ, аңлайышлы һәм самалы. Әлбиттә, дини йырҙар темаһына күп һөйләргә була, ләкин халыҡ-ара бәйгеләрҙә лә билдәләнгән ваҡыт - регламенттан һәм сығыштың темаға ярашлы әҙерлегенән тайпылмау төп шарт һәм күрһәткес булып тора. Сибайҙағы йыйында хөрмәтләп, һәр шартты теүәл үтәргә ынтылыуы Флүзә Хәлитоваға ҡарата баһамандарҙың ышанысын яуланы. Ырымбур яғынан үҙ тимер атында елдертеп Сибай тарафына алып килгән хәләл иптәшен һөйөндөрөп, Флүзә Хәлитова 6-сы төбәк-ара мөнәжәт фестиваленең яңғыҙ башҡарыусылары араһында Гран-при бүләген алып ҡайтып китте. Бындай рухлы, илһамлы ижади һөнәргә рәхмәттән башҡа ни әйтһәң!

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Быйылғы Мөнәжәтселәр бәйгеһе бик күп һорауҙар ҡуйҙы: дини йырҙар, мөнәжәт, нәсихәт, салауат әйтеү, әкбәр әйтеү, сүрә уҡыу - былар беҙҙең халыҡты тәрбиәләгән, кеше иткән төп рухи ижад. Уларҙы кемдәр башҡарған, ҡайҙа, ҡасан, кем алдында сығыш яһаған? Бөгөнгө заман заңы башҡа, ләкин мөнәжәт менән нәсихәтте, сүрә менән салауатты әйтеү бик кәрәк. Уларҙы дөрөҫ һәм урынлы итеп башҡарыу тәртибен дә тергеҙергә тура килә. Халыҡтың күҙе үткер, йөрәге һиҙгер. Саманы самаға тура килтереп, мөнәжәт менән нәсихәтте урын-еренә еткереп башҡарырға өйрәнәйек тә өйрәнәйек... Мөнәжәтселәр йыйылған урында һәр кем күңеленә ошо уй-теләкте алып ҡайта.**

**Сәрүәр СУРИНА.**



СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Бер нисек тә иҫләй алмаһағыҙ, психологтар был шөғөлдө онотоорға тәҡдим итә. Кәм тигәндә бер нисә минутҡа, иң күбе - бер нисә сәғәткә, көнгә. Һуңынан ҡабаттан хәтерегеҙгә төшөрөп ҡарау. Ҡайһы бер ваҡытта икенсе шөғөл менән мәшғүл булғанда йәки йоҡлап ятҡанда кәрәкле нәмә иҫкә төшә.

## Айвазовскийға эйәрегеҙ

Билдәле рус рәссамы Айвазовский үҙен илһамландырған пейзажды бөгөн психологтар күреү хәтерен күнектереү өсөн тәҡдим иткән ысул менән хәтерендә ҡалдырған. Предметҡа, пейзажға йәки кешегә 3 секунд ентекләп ҡарағыҙ. Һуңынан күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм ошо предметты ентекле итеп күҙ алдына баҫтырығыҙ. Был образ буйынса үҙегеҙгә һорау бирегеҙ. Һуңынан күҙегеҙҙе 1 секундҡа асығыҙ ҙа, образды тулыландырығыҙ, күҙегеҙҙе ҡабат йомоғоҙ һәм предметты асыҡ итеп һүрәтләргә тырышығыҙ. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ.

## Бөйөк "тамашасылар" нисек күнеккән

Билдәле оратор Марк Туллий Цицерон үҙенсәлекле һәләткә эйә булған - ул бер ниндәй яҙыуһыҙ сәғәттәр буйынса бик күп дәлилдәр, һандар, цитаталарҙан торған телмәр һөйләй алған. Сығышы алдынан төп һүҙҙәрҙе һәм тезистарҙы уйында ғына сенат бинаһының түбәһендә әүәләп эшләнгән биҙәктәргә "элеп" сыҡҡан. Телмәр тотҡанда, билдәле бер тәртиптә теге йәки был фигураға ҡарап, тексты еңел һөйләгән. Ассоциатив тәжрибәне Карел Чапек үҙенең "Профессор Роусс тәжрибәһе" тигән хикәйәһендә файҙаланған. Профессор, үлтереүсене асыҡлау өсөн ассоциатив тәртип ысулын ҡулланған, тимәк, үткәндәрҙәге образдарҙы тергеҙеү кешене ошо ваҡытта нимә борсоуына бәйле. Роусс һүҙҙәр әйткән, ә ихтимал үлтереүсе башына килгән тәүге ассоциацияны һөйләргә тейеш булған. Һөҙөмтәлә күпмеләр тап килеүҙән һуң, ҡасан, ҡайҙа, нисек үлтереш булыу һәм мәйеттең ҡайҙа күмелеүе асыҡланған.

## "Тыңлаусылар" өсөн шпаргалка

Бындай категория өсөн тауыш ассоциацияһы ысулын ҡулланыу яҡшы. Классик миҫал - күптәр "винегрет" һүҙенең нисек дөрөҫ яҙылышын белмәй. Күпме генә яҙһалар ҙа хатаға юл ҡуялар. "Вино пьют негры" һүҙбәйләнеше В-нан һуң И яҙылыуын хәтерегеҙҙә ҡалдырырға ярҙам итер. Сит ил телдәрен уҡытыусылар ҡайһы берҙә таныш булмаған һүҙгә русса яңғырашлы һүҙ таба. Мәҫәлән, латин тамырын белгәндә, башҡа өс-дүрт телдә һүҙ аңларға мөмкин. Кишерҙе генә алғанда, ул латинса carota, инглизсә - carrot, французса - carrote, беҙҙә - каротин.

## Мәғәнәһеҙ хикәйә төҙөгөҙ

Яңы мәғлүмәтте хәтерегеҙҙә ҡалдырғығыҙ киләме? Уларҙан мәғәнәһеҙ хикәйә төҙөгөҙ. Сюжет ни тиклем мәғәнәһеҙерәк, уны иҫтә ҡалдырыу шул тиклем еңелерәк. Ҙур һандарҙы ла хәтерҙә еңел ҡалдырырға мөмкин, әгәр уларҙы хайуан, үҫемлек йәки предмет итеп күҙаллағанда. Мәҫәлән, ике - аҡҡош, бер - бағана, һигеҙ - матрешка, алты - йоҙаҡ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 22 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 22 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Светлана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "Познер". [16+]
1.05 "На самом деле". [16+]
2.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
4.00 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Дожить до любви". [12+]
23.45 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.30 Т/с "Ледников". [16+]

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Бизнес-проба. [12+]**
**17.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омская область).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Күстәнәс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Брюс Ли: Рождение Дракона". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 23 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 23 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Светлана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 Модный приговор.
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
3.55 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Дожить до любви". [12+]
23.45 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.30 Т/с "Ледников". [16+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Указом Екатерины Великой. [12+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Бай баҡса. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Әлләсе… [12+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Патруль". [18+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 24 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 24 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Светлана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 Модный приговор.
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
3.55 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Дожить до любви". [12+]
23.45 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.30 Т/с "Ледников". [16+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 "Аль-Фатиха. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Книга. [12+]**
**15.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.30 "Городок АЮЯ. [0+]**
**15.45 "Ал да гөл. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Имею право. [12+]**
**17.00 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - СКА (Санкт-Петербург).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Молодые стрелки". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 25 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 25 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Светлана". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 Модный приговор.
3.00 Новости.
3.05 Модный приговор.
3.55 Давай поженимся! [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Дожить до любви". [12+]
23.45 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.30 Т/с "Ледников". [16+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Любовь тракториста". [16+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Д/ф "Китай: правила для жизни". [12+]**
**17.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Песня года". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Алтын тирмә. [0+]**
**23.45 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "По млечному пути". [12+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 26 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 26 октября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 Жить здорово! [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос. Перезагрузка". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Х/ф Премьера. "Механика теней". [16+]
2.05 "Время покажет". [16+]
3.20 Модный приговор.
4.10 Фигурное катание. Гран-при-2018. Прямой эфир из Канады.

### РОССИЯ 1
5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Дожить до любви". [12+]
1.35 Х/ф "Расплата за счастье". [12+]

### БСТ
**7.00 Сәләм. [12+]**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Маршал Язов. По своим не стреляю". [12+]**
**11.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 Конкурс "Красивое село-2018". [12+]**
**15.00 Башҡорттар. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя… [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Бирешмә. Профи. [12+]**
**19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Позывной "Барс". [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Моя семья". [6+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ч/Б". [16+]**
**2.15 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә сәсән". [12+]**
**4.00 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.00 Х/ф "Ч/Б". [16+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 27 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
7.20 Д/с "Россия от края до края".
7.55 Играй, гармонь любимая!
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Тамара Семина. "Мне уже не больно". К юбилею актрисы. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "На 10 лет моложе". [16+]
13.05 "Идеальный ремонт".
14.15 "В наше время". [12+]
15.10 Фигурное катание. Гран-при-2018. Трансляция из Канады.
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Мегрэ: Ночь на перекрёстке". [12+]
0.50 Х/ф "Крепостная актриса".
2.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]
3.45 Модный приговор.
4.35 "Мужское / Женское". [16+]
5.15 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
13.00 Х/ф "Ты мой свет". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.20 Субботний вечер с Николаем Басковым.
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Гражданская жена". [12+]
1.00 Х/ф "Любовь на четырёх колёсах". [12+]
3.10 Х/ф "Огни большой деревни". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "От винта". [6+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 Посмотрим… [0+]**
**10.30 "Большой чемодан. [6+]**
**11.15 Кустэнэс. [12+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 "Бай". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Концерт заслуженного артиста РБ Махмута Надыршина. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим… [6+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Артист". [12+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.30 Весело живем. [12+]**
**4.45 Х/ф "Артист". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 28 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Новости.
6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.15 Фигурное катание. Гран-при-2018. Трансляция из Канады.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Наталья Кустинская. Красота как проклятье". [12+]
13.25 Х/ф "Три плюс два".
15.20 "Три аккорда". [16+]
17.20 Премьера. "Русский ниндзя". Новый сезон.
19.20 "Лучше всех!".
21.00 "Толстой. Воскресенье".
22.30 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр.
23.40 Х/ф "Отпуск по обмену". [16+]
2.15 Фигурное катание. Гран-при-2018. Трансляция из Канады.
3.50 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1
5.05 Субботний вечер с Николаем Басковым.
6.40 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Смеяться разрешается.
13.35 Х/ф "Перекрёсток". [12+]
17.40 "Удивительные люди-3". Финал.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Революция. Западня для России". [12+]
2.10 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 Бай баҡса. [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей. [6+]**
**11.45 Современник. [12+]**
**12.00 Моя семья. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [0+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область).**
**19.15 Имею право. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Әлләсе… [12+]**
**20.45 Теге өсәү! [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Свидание с джазом. [12+]**
**23.30 Дознание. [16+]**
**0.00 Х/ф "Легенда". [18+]**
**2.15 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**4.45 Х/ф "Легенда". [18+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СӘЙӘСИ ЗОЛОМ ҠОРБАНДАРЫН ХӘТЕРЛӘЙЕК




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Икмәк. Эремсек. Сүбәк. Баҡса. Ҡорот. Реклама. Ташбаҡа. Ҡымыҙ. Ҡурмас. Тырма. Ҡан. Ыумас. Тибр. Лавр. Ғалим. Муҡса. Буҙа. Ҡаҙылыҡ. Ҡойҡа. Гиппиус. Йәтсә.

**Вертикаль буйынса:** Тултырма. Бишбармаҡ. Аҡсарлаҡ. Эпос. Адыгей. Араҡы. Иле. Ҡаршы. Лампас. Бальмонт. Уҡлау. Кәкүк. Сәс. Ҡаҡ. Ырғаҡ. Ырыу. Ыҙма. Туҙ. Сумка.

## СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында - премьера. Мөҙәрис Багаев пьесаһы буйынса ҡуйылған "Үәт, исмаһам, ахырызаман!" комедияһы үҙенең жанрын тулыһынса аҡлай, тиергә була. Туйғансы көлөп ҡайтырға теләһәгеҙ, мотлаҡ барып күрегеҙ.**

# ҮӘТ, ИСМАҺАМ, ПРЕМЬЕРА!

Һәр халыҡтың милли үҙенсәлеге булған кеүек, һәр халыҡҡа ғына хас юмор ҙа була. "Үәт, исмаһам, ахырызаман!" спектакле халыҡсан юморы менән генә лә иғтибарға лайыҡ. Комедияға хас булғанса, бында бар ваҡиғалар ҙа төп герой һаран Харундың кире сифаттарынан, ҡыланыштарынан, хаталарынан көлөү аша үҫешә. Халҡыбыҙҙың тап ошолай, бер аҙ сурытыбыраҡ, төртмә һүҙ менән шаяртыуын инҡар итә алмайбыҙ. Хатта ошо һүҙ уйнатып һөйләшеүебеҙҙе тәржемә яһап та башҡа халыҡтарға аңлата алмаясаҡбыҙ, унын өсөн башҡорт булып тыуырға һәм ошо мөхиттә үҫергә кәрәк. Һәр ауылдың үҙенең шаян ҡарттары, Алдарҙары, Ерәнсәләре һәм башҡалары булды һәм, шөкөр, әле лә бар. Унан һуң, табындарҙа, әңгәмә ҡорҙарында бар халыҡты үҙенең ауыҙына ҡаратып, көлдөрөп йөрөүселәр бөгөн юҡмы ни?

Сәхнә биҙәлеше, халыҡсан музыка тамашасыны шундай матур бер донъяға алып инә, ошонан ғына ла оло кинәнес тояһың. Башҡортостандың халыҡ артисы Нәғим Нурғәлиндың кире геройы Харунға шундай ыңғай тойғолар уяттыра алыуы унын оҫталығы тураһында һөйләй. Күптәр өсөн Аида Күлбаева (Ишбикә) яңы яҡтан асылғандыр. Һөҙөмтәлә, ахырызаман алдынан изге эштәр эшләп ҡалырға ынтылыу теләге кемгәлер ғаилә һәм балалар бәхете, кемгәлер мөхәббәт алып килә.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ишембай районы Һайран ауылында йәшәүсе һөйөклө ҡатыным, әсәйебеҙ **Ғәлиә Марс ҡыҙы ИЛЬЯСОВАны** тыуған көнө менән ихлас ҡотлайбыҙ!

Һәр көнөң шатлыҡтары менән килһен, йөҙөңдән йылмайыу китмәһен. Һин бәхетле булһаң, беҙ ҙә бәхетле, һин эргәбеҙҙә саҡта күңелебеҙ тыныс, өйөбөҙ йәмле, ашыбыҙ тәмле. Муллыҡта, күңел бөтөнлөгөндә тағын оҙаҡ-оҙаҡ йылдар бергә йәшәйек әле! Һиңә ныҡлы сәләмәтлек, оҙон ғүмер теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, тормош иптәшең, балаларың.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (13) дүшәмбе | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |
| 23 (14) шишәмбе | 6:32 | 8:02 | 13:30 | 16:27 | 17:57 | 19:27 |
| 24 (15) шаршамбы | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 16:25 | 17:55 | 19:25 |
| 25 (16) кесе йома | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |
| 26 (17) йома | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 27 (18) шәмбе | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 16:18 | 17:48 | 19:18 |
| 28 (19) йәкшәмбе | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 16:16 | 17:46 | 19:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 октябрь "Прометей"** (М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" пьесаһы буйынса) 16+

**21 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**23 октябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+

**24 октябрь "Диңгеҙ. Утрау. Хазина"** (Д. Сәлимйәнов), пираттар мажараһы. Башлана 12.00 0+

**24 октябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**25 октябрь "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+

**25 октябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр. Башлана 15.00, 18.00 6+

**26 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20-21 октябрь "О чем поет осень?"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). Башлана 16.00 0+

**20 октябрь "Буратино"** (А. Толстой). Башлана 12.00, 14.00 0+

**21 октябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). Башлана 12.00, 14.00 0+

**26 октябрь "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин), спектакль-портрет. Башлана 19.00 12+

✓ *Ҡыш - ҡыҫыл, яҙ - яҙыл, йәй - йәйел, көҙөн үҙең белерһең.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



АФАРИН!




# МӨХӘМӘТША БУРАНҒОЛОВТЫҢ...

## халҡыбыҙға мираҫы баһалап бөткөһөҙ

**(Башы 11-се биттә).**

**Спектаклдә өсөнсө линия ла бар тип хаҡлы рәүештә әйтә алабыҙҙыр, унда "Урал батыр" эпосы ла ҡулланыла?**

- Һүҙҙе йыраҡтаныраҡ башлайым. Спектаклде эшләгән саҡта аңлатып булмай торған күренештәр ҙә булды. Бынан 1-2 йыл элек БР Драматургия һәм режиссура үҙәге менән экспедицияла Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылына сәсәндәр ташына барғайныҡ. Буранғолов сәсәндәргә килгәс, уға яҙыу өсөн уңайлы булһын өсөн бер ташты тигеҙләп бирәләр. Ошо ташты уйып: "1910 йылда был урында Ғ. Арғынбаев һәм Х. Әлмөхәмәтов сәсәндәрҙән М. Буранғолов "Урал батыр" эпосын яҙып алған" тип яҙғандар һәм бөгөн ул үҙенсәлекле бер һәйкәл булып тора. Шунда Хәмит сәсәндең ейәнсәре Сәлимә инәй Хәсәнова менән танышҡайныҡ һәм мин уға телефон номерын биреп киткәйнем. Спектакль ҡуя башлағандан алып, инәй миңә гел шылтыратып торҙо. Ул һикһәндән өҫтә инде, йә бер үк нәмәне ҡабат-ҡабат һорай, йә хәл генә белешә, йә телефон төймәһенә яңылыш баҫа. Шулай спектакль ҡуйылыуын белмәйенсә лә, ул репетициялар мәлендә гел бәйләнештә булды. Тағы ла бер мөғжизәле күренеш булды. Августа сәхнәлә репетициялар башланыҡ. Сентябрь буйына сәхнәлә күбәләк осоп йөрөнө. Беҙ уға шул тиклем өйрәнеп киттек. Аҙаҡҡы репетицияларҙың береһендә актрисаларҙың береһенең яурынына ултырып йөрөнө. Төп героиня Таңһылыу һандыҡ алдына ултырып, бысаҡ сығарыр алдынан ғына һандыҡҡа осоп инде лә, актриса һандыҡтың ҡапҡасын япты. Театр образдар менән эш итә, спектаклдә һандыҡ ниндәйҙер кимәлдә ҡәберҙе, табутты ла аңлата. Залда ултырған 3-4 кеше барыбыҙ ҙа аһ итеп ҡалдыҡ. Ошонан һуң ул күбәләк сәхнәлә османы. Әлбиттә, былар барыһы ла осраҡлы булыуы ихтимал, шул уҡ ваҡытта, бәлки, бер нәмә лә осраҡлы түгелдер?

"Урал батыр" эпосы спектакль башланыр алдынан да, спектаклдең башында, уртаһында, аҙағында ла яңғырап тора. Тауыш тирмә төнәүе аша төшә. Минең уйымса, был эпосты һаҡлап ҡалыу Мөхәмәтша Буранғоловҡа Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған миссия булғандыр ул. Сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев менән Хәмит Әлмөхәмәтовтан яҙып алған эпосты ла ул һуңғараҡ, бер нисә тапҡыр ҡулға алынып, иреккә сыҡҡас ҡына латин графикаһына күсереп яҙа. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты эпосты ошо вариантында баҫтырып сығара. Әйтерһең, шуның өсөн генә ул тере ҡала. Ошо миссияны еренә еткермәйенсә, һәләк була алмай ул. Бәлки, шуның өсөн уны Аллаһы Тәғәлә һаҡлағандыр? 1920 йылда, бер вариантында Ленин, бер вариантында юғары вазифалағы башҡа берәү менән осрашҡандан һуң, иреккә сығарыла, тиелә. Бер нисә тапҡыр ҡулға алына, һәр осраҡта ла ғәйеп эше оҙаҡҡа бармай. Уйлап ҡараһаң, вазифаларына күрә лә берәй ғәйеп тағыуы бер ни тормаған заман була бит. Ошоларҙы уйлаһаң, Буранғоловтың яҙмышы үҙе бер мистика.

Шуға ла спектаклдә "Урал батыр" эпосын ҡулланмау дөрөҫ булмаҫ ине. Яңғыҙ яугир яу түгел, тиһәләр ҙә, бер кешенең тарихта шундай эҙ ҡалдыра алыуының асыҡ миҫалы ул. Халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ мираҫ ҡалдыра Буранғолов. Иң беренселәрҙең беренсеһе була, бөгөн фольклор буйынса ниндәй генә китапты асып ҡарама, барыһы ла Буранғоловтың яҙмаларына таяна.

**Һуңғы ваҡытта бер үк мәлдә төрлө ижадсылар тарафынан сәхнәләрҙә, кинола башҡорт халҡының бөйөк улдары һәм ҡыҙҙары яҙмышы һәм ижадын сағылдырған әҫәрҙәр тыуа. Был халҡыбыҙҙың ниндәйҙер кимәлдә, ниһайәт, ошоға өлгөрөп етеүен һөйләйме?**

- Мәле етмәһә, бер нәмә лә булмай, тимәк, ваҡыты еткәндер. Беҙ халҡыбыҙ тарихының 50 процентын да белмәйбеҙ, үкенес. Халыҡ тарихында, һәр хәлдә, милли мәҙәниәт һәм сәнғәттә ниндәйҙер яңырыу осоро башланды, тип әйтер инем. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында үҙаллылыҡ яулағас, тынысландыҡ. Бәхтиһән, иртәрәк тынысланғанбыҙ, икенсе эштәргә күберәк иғтибар йүнәлтергә кәрәк булған. Хәҙер үҙебеҙҙең фекеребеҙҙе әйтергә тейешбеҙ. Шуға ла был спектаклгә лә төплө уйҙар һалырға, театрҙың, һәр беребеҙҙең бурысы нимәлә икәнен асыҡларға тырыштыҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘНДӘ ҺӨЙЛӘР,

## тәҡдир көлөр

Ҡыш - ҡыҫыл, яҙ - яҙыл, йәй - йәйел, көҙөн үҙең белерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тимер кешеләр юҡ. Ағас кешеләр генә бар...

**(Лидия Гинзбург).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кешенең яратҡан ишәге була. Ул уны Шванти Дирайя тип исемләп йөрөтә. Был кеше ошо ишәге ярҙамында батшаға хеҙмәт итә, уның барлыҡ йөктәрен ташый. Берҙән-бер көндө Шванти Дирайя үлеп китә. Йөк ташыусы ҡайғыһынан сәсен яп-ялтыр итеп ҡыра һәм изге һыу менән ҡойона. Был илдә иң яҡының йә шәхес дәрәжәһендәге кеше үлгәндә генә шулай итәләр. Икенсе көндө йөк ташыусы батша һарайына барһа, уны батшаның вәзире күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти йөк ташыусы. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти вәзир. "Әлбиттә, шулай ит" , - ти йөк ташыусы. Вәзир шулай итә лә. Уны батшаның кәңәшсеһе күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти вәзир. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша кәңәшсеһе. "Әлбиттә, шулай ит", - ти вәзир. Сәсен яп-ялтыр итеп ҡырған кәңәшсеһен күргәс батша аптырап китә һәм ни өсөн шулай эшләүе менән ҡыҙыҡһына. "Батшам, кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..."- ти кәңәшсеһе. "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша. "Әлбиттә, шулай ит", - ти кәңәшсе. Батша шулай итә лә. Уны батшабикә күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һорай. "Һин ишетмәнеңме ни, һөйөклөм? - ти батша. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Ә кем һуң ул?" - тип һорай батшабикә. "Белмәйем, - ти батша. - Был яңылыҡты миңә кәңәшсем әйтте". Батшабикә кәңәшсене саҡырта ла, унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорай. "Белмәйем, - ти кәңәшсе. - Миңә был яңылыҡты вәзир әйтте..." Вәзирҙе саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "Белмәйем, миңә был яңылыҡты йөк ташыусы әйтте", тип яуаплай вәзир. Йөк ташыусыны саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "О-о, батшабикәм, минең яратҡан ишәгем бар ине, уның исеме Шванти Дирайя. Ул үлеп ҡалды..." тип илаулап яуап бирә йөк ташыусы...**

**Был шундай аҡыл бирә: кеше һарыҡ көтөүе логикаһына бирелмәҫкә тейеш. Ул көтөүҙә юлбашсы һарыҡ соҡорға һикерһә, барыһы ла уның артынан һикерә. Улар "Был соҡорға ниңә беҙ ҙә һикерергә тейеш?" тип уйламай. Юлбашсы һикергәс, был дөрөҫ юл тип уйлай улар..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1874/10